**✓Иғтибар! “Киске Өфө”гә яҙыла алмай ҡалған таныштарығыҙға әйтегеҙ: улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитте марттан алдыра башлаясаҡ. Индексыбыҙ – 50665. 4 айға яҙылыу хаҡы – 158 һум 36 тин.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

10-16 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2007 ЙЫЛ

№6 (216)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Сәйетбабалар...** иң дәртлеһе



4

**Был-һинең һәм минең ер!** Яҙмышы ла беҙҙең кулда



6-7

**Атаһынан күргән уҡ юныр**



11

**Асылмаған хазиналар һандығы**



12

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ** 14-15


РӘМИ ҺҮҘЕ



# Мин көрәшер өсөн тыуҙым

**Иң бөйөк һүҙ әле**
**әйтелмәгән,**
**Иң бөйөк көн әле ул алда.**
**Килер ул көн, килер ул ҙур**
**байрам,**
**Туй яһарбыҙ шаулап**
**урамда.**

**Ул туйға мин, бәлки,**
**барып етмәм,**
**Ярһыу атым янып**
**йығылыр.**
**Тик минһеҙ ҙә тулы булыр**
**ул туй,**
**Мин белмәгән дуҫтар**
**йыйылыр.**

**Һөйләшһәләр әгәр туған**
**телдә,**
**Телгә алыр улар мине лә.**
**Сөнки мин киләсәк менән**
**бергә**
**Һаҡлап саптым, телем,**
**һине лә.**

**1962 йыл.**

* * *

Юҡ, яҙмыш, мин һиңә бирелмәмен. Юҡ, бирелмәмен. Тормошҡа мин һинең ҡулың аҫтында илап йәшәр өсөн килмәнем. Мин ҡайнар ҡом сүлдәрендә аҙашҡан юлсы ер йөҙөндә бөтә дарьялар ҙа етмәҫ кеүек һыуһағандай булһа, шуның кеүек үк мин дә көрәшкә һыуһаным... Юҡ, мин был һүҙҙе матур булған өсөн түгел, ә уға хаҡлы булған өсөн әйтәм. Мин был һүҙҙәремде эшем, тирем, хеҙмәтем, йөрәк ҡаным менән, кәрәк икән, һис бер тамсы ҡыҙғанмайынса, саф һәм намыҫлы, сәскә кеүек ҡыҫҡа булып ҡалған ғүмерем, бөтә тормошом менән дә аҡларға әҙер. Мин үҙемә тормошта еңел юл һайлауҙы кешеләр алдында иң ҙур ҡәбәхәтлек итеп һананым. Мин кешеләр өсөн тыуғанмын һәм мин - кешеләргә!.. Шунан башҡаса йәшәүҙе мин күҙ алдына ла килтерә алмайым. Юҡ, башҡаса йәшәү мөмкин дә түгел. Минең тоҡомом ундай һуҡыр булған иң ваҡ йәшәү менән йәшәмәй!.. Һәм ул ундай "йәшәү" менән "йәшәргә" хоҡуҡһыҙ. Үҙеңдең тыуған ереңдә тыуған халҡың өсөн ғүмереңде көрәшкә биреүҙән дә гүзәлерәк нәмә бар һуң?..

Мин дөрөҫлөктөң һис бер шикһеҙ еңеп сығыуын, киләсәктең матур буласағын белгән өсөн түгел, ә дөрөҫлөктөң еңеп сығыуы кәрәк булғанға, тормошта тик көрәшкәндә генә матурлыҡ булғанға, кешелек идеалының тормошҡа ашыуын ысын йөрәктән һәм бөтә күңелем менән теләгәнгә, тик шул юлда ғына файҙалы булыу мөмкин булған өсөн дә үҙемә ҙур ҡая таштар ҡаплаған, боролмалы-боролмалы, ауыр һәм ҡатмарлы юлды һайлап алдым. Мин кешеләр йәшәгән өсөн түгел, ә йәшәүҙең гүзәл булғанлығы өсөн йәшәйем. Мин башҡалар һөйгән өсөн һәм һөйөүҙең бер тәбиғи закон булғанлығы өсөн түгел, ә һөйөүемдең саф бер тойғо һәм уны бөйөк бер гүзәллек итеп күргән өсөн, көрәшле тормошто тик ул ғына гөлгә биҙәгәне, тик ул ғына тормошто, кешеләрҙе бер-береһенә шунда тығыҙ итеп бәйләй алғаны өсөн, уның эшкә, хеҙмәткә рух аҙығы биргәнлеге өсөн һөйәм. Шуға күрә ул бер генә һәм мәңгелек булырға тейеш. Мин уны онотолоп ҡалып, тормошта тыныслыҡ табыр урын тип аңламайым. Ә ул ҡанатландырһын, рухландырһын, көс бирһен...

***("Уҡыусы көндәлектәре"нең өсөнсө китабы "Уҡыу океаны" тип атала. Был өҙөк ошо китаптан. Рәми Ғарипов был юлдарҙы 1950 йылдың 19 декабрендә яҙған. Уға әле 18 йәш тә тулмаған).***

***✓ Рәми ағай икеләнеүҙәремде таратып ебәрҙе: быndай хаттар яҙыу өсөн тормош тәжрибәһе кәрәклеген, ә шулай ҙа уҡыусыға мөмкин тиклем йылы һүҙ һәм изгелек еткерергә тырышыу фарыз булыуын иҫкәрткәйне.***



ИШАРА

# РӘМИ АҒАЙ ҺАБАҠТАРЫ

**Рәми ағай менән бик аҙ ғына ваҡыт аралашып, ғүмер юлына етерлек һабаҡтар алған кешеләрҙең береһемен мин. Хәйер, Рәми ағай шәхестәр донъяһындағы бер феномен бит инде ул: уның менән ғүмер буйы аралашҡан, йәнәш йәшәгәндәр генә түгел, хатта уны күрергә, аралашырға өлгөрмәгән быуын ижадсылары ла үҙҙәрен Рәми мәктәбен үткән кешеләр тип иҫәпләй /Гәзитебеҙҙең был һанындағы "Күреп белмәһәк тә..." тигән рубрикала улар ҙа үҙ һүҙен әйтә/.**

Яҙғаным бар инде: БДУ-ның бишенсе курсында уҡығанда "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эш башланым. Шунда ике ай самаһы ғына Рәми ағай менән бер бүлмәлә ултырып эшләргә, хеҙмәттәштәр булырға яҙҙы. Ошо ҡыҫҡа ғына осорҙа уның менән аралашыуҙан, һөйләшеүҙән алған фәһем- һабаҡтар мине ғүмерем буйы оҙата килә һымаҡ. Ул - бөйөк шағир, әммә мин уны шулай уҡ бөйөк журналист та итеп беләм, сөнки журналист һабаҡтарының иң кәрәклеһен, иң мөһимен унан алдым, тип иҫәпләйем.

Тәүге һабаҡ, моғайын, "яуаплылыҡ" тигәнде лайыҡлы күтәрергә өйрәнеү булғандыр. "Башҡортостан ҡыҙы" журналына эшкә килмәҫ элек үк, Яҙыусылар союзындағы йәш ижадсылар менән булған бер ултырыштан һуң ундағы сығышымды мәҡәлә итеп яҙып килтерергә ҡушҡайны Рәми ағай. Ул мәҡәләне яҙыу өсөн ниндәй ҙур тырышлыҡ һалғанымды, төндәр йоҡламайынса, яҙған материалымды шымартыуымды, ҡат-ҡат күсереүемде нык хәтерләйем. Остазыңдың, үҙеңдән тәжрибәлерәк коллегаңдың, етәксеңдең ышанып ҡушҡанын теүәл һәм мотлаҡ үтәү яуаплылығының, эшеңдең сифаты, әйткән һүҙеңдең тослоғо өсөн яуаплылыҡтың ни икәне шул саҡта тәүгә татылған, артабан шулай дауам ителгән. Шул сифаттан әле булһа айырылған юҡ.

Артабанғы һабаҡтар, әлбиттә, Рәми ағай менән бер бүлмәлә ултырып, бер үк эш башҡарыуға тотонғас булды. Иң тәүҙә уҡыусыларҙың хаттарына иғтибар, уларға изгелекле мөнәсәбәт талап итте Рәми ағай. Тәүге көндә үк ул алдыма хаттар менән тулы ҡалын папка һалды. "Бына ошо хаттарҙың журналға баҫтырып булырҙайҙарын эшкәрт, мәҡәләгә әйләндер, баҫтырып булмағандайының авторына хат яҙ", тип, бер-ике ауыҙ һүҙ менән генә бурысымды аңлатты. Мин башымды ла күтәрмәй, шул хаттар менән булдым. Әҙерләгән мәҡәләләр һәм хаттарға яуаптарымды Рәми ағайҙың өҫтәленә тикшерергә һалам - ул шулай ҡушҡайны. Рәми ағай мәҡәләләрҙе машинкаға баҫтырырға бирә, ә хаттарҙы кире ҡайтара һәм:"Йылыраҡ итеп яҙ", - ти.

Мин нисек кенә тырышһам да, ул хаттарҙы "йылыта", тейешле һүҙҙәр таба алмай ҡаңғырам. Был бурысты нисек хәл итергә кәрәклеген Рәми ағайҙың үҙенең авторҙарға яҙған хаттарын уҡығас ҡына аңланым. Уның был хаттары үҙе бер әҙәби әҫәр һымаҡ ҡабул ителә ине. Уның тормош тураһында кәңәштәр биреп, ижад хаҡында ялҡынланып яҙғандарын уҡыным да, үҙемдә ошондай һәләтлек булмауын танып, борсоуға ҡалдым. Үҙ-үҙемдән төңөлә яҙып ултырғанда Рәми ағай икеләнеүҙәремде таратып ебәрҙе: быndай хаттар яҙыу өсөн тормош тәжрибәһе кәрәклеген, ә шулай ҙа уҡыусыға мөмкин тиклем йылы һүҙ, изгелек еткерергә тырышыу фарыз булыуын иҫкәрткәйне.

Публицистик мәҡәләне идея, фекер, аҡыл, төрлө сюжеттар менән байытыу буйынса тәүге һабаҡтарҙы ла Рәми ағайҙан алдым. Бер саҡ ул Ҡыйғы районына командировкаға барып ҡайтты ла, мәҡәләһенә нисек материал туплауы тураһында һөйләп китте: "Бер ауылға барып индек, ауыл осондағы бер йорт алдында эскәмйәлә ике әбей һөйләшеп ултыра. Улар янында туҡтап, донъя хәлдәре, колхоз эше, етәксеһе тураһында һораша башланыҡ. Шул арала күктә йылы яҡҡа юл алған торналар тауышы ишетелде. Һүҙгә-һүҙ ялғанып, әбейҙәр менән ошо ҡоштар, тәбиғәт, заман хаҡында ла гәпләшеп алдыҡ. Былар барыһы ла миңә мәҡәлә яҙғанда ярҙам итте. Аяҡ аҫтындағын күрмәй, күктән турғай тоторға йөрөгәндәй ҡыланырға ярамай журналист кешегә, ул барыһын да үҙе күрергә, үҙе ишетергә тейеш, ә төбәп барған хужалыҡ етәксеһенең ауыҙына текәлеп, ул һөйләгәндәрҙе ҡағыҙға күсереп кенә ултырыу эш түгел - ҡалай күңелһеҙ, уҡымһыҙ була ундай мәҡәләләр..." Ошо һөйләгәндәр ҙә аҡыл булды миңә, ул аҡыл артабан мәҡәлә яҙыу ысулымдың нигеҙенә ятты.

Һәр кем өсөн көйә, һәр кемгә ярҙамға ташланырға әҙер булған Рәми ағай кешелеклелек, киң күңеллелек һабаҡтары ла бирҙе. Берәүгә лә битараф түгел ине ул. Берәүгә лә ҡырын йөҙ күрһәтмәне. Бер саҡ бүлмәбеҙгә редакциянан-редакцияға йөрөп, юҡ-бар әҫәрҙәрен баҫтырырға тәҡдим итеп, әрһеҙләшеп, үҙенән биҙҙереп бөткән бер ағай килеп инде. Минең уға ҡарата фекерем ыңғай түгел ине. Шул ағай менән дә матур итеп һөйләште, кәңәштәр бирҙе, хатта яҙмаларын алып ҡалды Рәми ағай. Ул кеше сығып киткәс, мин:"Уф, ошо ағайҙың әрһеҙлеге..."- тип ысҡындырҙым. Һүҙемде дауам да итмәне, кире лә ҡаҡманы Рәми ағай. Ә мин яңылыш һүҙ әйтеүемде аңлап, уңайһыҙландым. Бер аҙҙан ул:"Үҙеңә оҡшамаған бар нәмәне кире ҡағырға, юҡҡа сығарырға ярамай. Һәр ямандан яҡшыны эҙләргә кәрәк - табып була..." тип ҡуйҙы. Был һүҙҙәрҙең миңә яуап итеп әйтелеүен белһәм дә, мәғәнәһен аңламағанмындыр инде, көндәлегемә яҙып ҡуйғанмын бит быna:"Ямандан яҡшыны табып буламы икән ни ул? Рәми ағай шулай тисе". Рәми ағай алдында башҡаса кемдер тураһында яман фекер әйтеүҙән тыйылғайным шул хәлдән һуң. Аҙаҡ иһә башҡалар алдында ла тыйылырға өйрәнелде, иң мөһиме, яман әҙәмдең дә яҡшы яҡтарын күрергә тырышылды.

Хаҡһыҙлыҡ, ғәҙелһеҙлек ҡорбаны булған мәлдәренә лә шаһит булынды Рәми ағайҙың. Әммә ул зарланманы ла, кемделер ғәйепләмәне лә, әрнеүҙәрен тышҡа ла сығарманы. "Башҡортостан ҡыҙы" журналының ул саҡтағы баш мөхәррире менән минең алда сираттағы әйтешеүенән һуң, Рәми ағайҙы йыуатырға теләптер инде, үҙемсә ризаһыҙлыҡ белдереп маташҡас, ул миңә: "Мин үҙемдең хаҡлы икәнемде, ул үҙенең хаҡһыҙ икәнен белә. Хаҡһыҙ булып та, шуны таный алмау - уның бәләһе. Шулай булғас, кемгә ҡыйыныраҡ? Әлбиттә, уға", - тип, тағы ла миңә йомаҡ булып, күп йылдар дауамында сиселәсәк аҡыл әйткәйне. Унһын да, быna, көндәлектәремә яҙып ҡуйғанмын.

Шиғырҙар яҙа инем бит әле мин ул саҡта. Яҙғандарым хаҡында Рәми ағайҙан ниҙер ишетергә бик теләһәм дә, ишетә алманым. Әммә... Йәштәр ижадына иҫ киткес иғтибарлы ине бит ул. Ысын мәғәнәһендә шағирлыҡ-шағирәлек һәләте булған бер нисә кеше менән һөйләшеүенә шаһит булдым. Уларҙың берәүһен күңелен үҫтерерлек итеп маҡтаны, икенсеһен ялҡаулығы арҡаһында булған талантын балҡытмаған өсөн ҡаты итеп тәнҡитләне. Ошо һөйләшеүҙәрҙе ишетеү үҙе үк миңә бик яҡшы ишара булды, ахры: һәр йәш кеше үҙендәге иң сағыу һәләтлеген билдәләп, шуны үҫтерергә тырышырға тейеш. Бер сиктән икенсеһенә һуғылып, үҙ-үҙеңде көсләп төрлө эшкә тотонаһың икән, бер нигә лә өлгәшә алмаҫһың. Рәми ағайҙың ошо ишараһынан һуң журналислыҡ менән ҡалырға ҡарар иттем...

**Шулай итеп...**

**"Ниндәй генә талант эйәһе булмаһын, ул барыбер үҙ заманы ҡағиҙәләренә буйһона. Һәр кем дә үҙе лайыҡ булған заманға эйә түгел шул. Кемдер хатта үҙе лайыҡ булған заманға эләкһә лә, уны үҙенә буйһондора алмай. Ләкин аҡылдың өҫтөнлөгө шунда: ул - мәңгелек. Әгәр ҙә ул тыуған быуат уның быуаты булмаған икән, киләсәк - уныҡы", -Бальтасар Грасиан тигән испан яҙыусыһының был һүҙҙәре беҙҙең бөйөк шәхесебеҙ, шағирыбыҙ, ағайыбыҙ Рәми ағай Ғарипов тураһында әйтелгән кеүек. Үҙ заманын үҙ бөйөклөгөнә инандыра алмаған шағирҙың аҡылы һәм таланты бөгөнгө заманды ла, киләсәкте лә үҙ алдында баш эйҙерә һәм баш эйҙерәсәк тә әле.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*КҮРЕП БЕЛМӘҺӘК ТӘ...*

## Төңөлөп ҡайтһам да...

Өфө мине тәүге килгәнемдә ҡабул итмәне. Самаһыҙ үҙһүҙле, бер ҡатлы ауыл малайын ҡосағын йәйеп ҡаршылай буламы һуң инде Өфө һынлы Өфө. 1977 йылдың июль айында, мин унынсыны тамамлағас, сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә килгәйнек Әхиәт ҡустым менән. Әхиәт һигеҙенсене тамамлағас, документын алдылар, миңә: "Һин барыбер әрмегә китәһең, хеҙмәт иткәс килерһең", - тинеләр. Шулаймы, тинем дә, киттек Ғата Сөләймәнов ағайҙың Октябрь революцияһы урамындағы фатирына. Дөбөр-шатыр барып индек. Ғата ағай һынлы ҡурайсының өйөндә ҡурай уйнау бәхете тейҙе беҙгә.

Ғата ағай ҙа шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатланы, "Ҡустым, әрменән һуң килерһең, ә Әхиәт ҡустыңды алабыҙ", тине. Мин уға: "Өфөгөҙ үҙегеҙгә булһын, бүтән бында килеп тә тормаясаҡмын", - тип, ағайҙың өйөнән хушлашмайынса сығып, ғорур баҫып, ауылға ҡайтып киттем. Үсегеүем шул булғандыр...

Ысынлап та, ҡабат Өфөгә аяҡ баҫмаҫлыҡ булып ҡайтҡайным. Әммә теүәл ике йылдан мине баш ҡалаға Рәми Ғарипов "саҡырып" килтерҙе. Тик Өфө ауылдашым шағир Рәйес Түләк менән икебеҙҙе Рәми Ғариповһыҙ ҡаршыланы. Уның 1977 йылда вафат булыуы хаҡында ла беҙ Өфөгә килгәс кенә белдек.

Тәүге тапҡыр Өфөнән "төңөлөп" ҡайтҡандан һуң мин колхозда эшләнем. Чабан да, кочегар ҙа, комбайнсы ла булдым. Бер мәл Баймаҡтағы китап магазинынан Рәми Ғариповтың "Йондоҙло уйҙар" тигән китабын һатып алдым. Быға тиклем күберәк дидактикаға, тыуған илде маҡтауға ҡоролған шиғырҙар уҡып йөрөп, уның шиғырҙарын бер уҡыуҙа ятлап алғас, аптырауға ҡалғайным. Әрменән һауа десанты ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеп ҡайтҡан күршем, ауылдашым Рәйескә лә Һаҡмар буйында һыу ингәндә уның шиғырҙарын уҡыным. Рәйес бер минут эсендә тоҡанды, баҡтиһәң, ул да, минең кеүек, әллә нисәнселер кластан шиғырҙар яҙып, берәүгә лә күрһәтергә ҡыймай, оялып йөрөгән булған икән. Икебеҙ ҙә тоҡандыҡ. Бер-беребеҙгә шиғырҙарыбыҙҙы уҡыныҡ һәм ике аҙнанан баш ҡалаға юлландыҡ. Әйткәнемсә, беҙҙе Өфө Рәми Ғариповһыҙ ҡаршыланы. Кем белә, ул булмаһа, шул саҡта ҡулыбыҙға китабы килеп эләкмәһә, һаман да ауылда йөрөр инек әле...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓7 февраль, тыуған көнө Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов өсөн ғәҙәттәге эш көнө булды - ул эш сәфәре менән Ҡыйғы, Мәсетле, Дыуан һәм Салауат райондарына юлланды, райондарҙың социаль-иҡтисади үҫеше менән танышты.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә БР Президенты Указы менән булдырылған грантҡа конкурстарҙа еңгән йәш ғалимдарҙы һәм йәш фәнни коллективтарҙы тәбрикләнеләр. Премьер-министр Рафаэль Байдәүләтов 30 йәш ғалимға ошондай гранттар биреләүе тураһында дипломдар тапшырҙы.

✓Күптән түгел Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов етәкселегендәге рәсми делегация Австрияла булды һәм Австрияның Иҡтисад һәм хеҙмәт министрлығында һөйләшеүҙәр алып барҙы, фирмалар һәм башҡа эшлекле даирәләр менән осрашты. Башҡортостан делегацияһы шулай уҡ Братиславала "Словенская Графия" фирмаһы етәкселеге менән осрашыу үткәрҙе. Делегация Башҡортостан Республикаһы Сауҙа вәкиллеген урынлаштырыу күҙалланған Сауҙа йорто бинаһы төҙөлөшөн ҡараны.

✓Былтыр льготаларҙы аҡсаға алмаштырыу тураһындағы Законды тормошҡа ашырыу сиктәрендә Башҡортостан халҡына 9 миллиард һумдан ашыу күләмдә льготалар, хеҙмәттәр, түләүҙәр күрһәтелгән. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов координация советы ултырышында сығыш яһап, 2006 йылда федераль льготниктарға 4,6 миллиард һумлыҡ, ә төбәктәгеләргә 912,7 миллион һумлыҡ түләүҙәр башҡарылған, тип билдәләне.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән Зиннәт Абдулла улы Аллаяров Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры итеп тәғәйенләнде. Ул күп йылдар мәғариф системаһында эшләгән, 2003 йылдан Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы директоры вазифаһын башҡарҙы.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Секретариаты етәксеһе Венир Ғәлимйән улы Аҙнағолов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде.

# ГРАЖДАН. СӘЙӘСМӘН. ПАТРИОТ.

## Башҡортостан Республикаһы Президентының тыуған көнө айҡанлы

**Күренекле сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһындағы иң ҙур субьекттарҙың береһенең етәксеһе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың шәхесе ҡатмарлы һәм үҙенсәлекле. Шундай ҙур дәрәжәле кеше өсөн был бер ҙә ғәжәп түгел. Уның гражданлыҡ тойғоһо республикабыҙ гаранты булараҡ Башҡортостандың күп милләтле халҡы алдындағы юғары бурысын тәрән аңлауҙан тора. Төп Закон рухына, Башҡортостандың тарихи тәғәйенләнешенә тоғролоғо, халыҡтың өмөт-хыялдарын тойоу хисенең көслө булыуы йәһәтенән граждан, сәйәсмән һәм патриот Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов айырым урын биләй.**

**Сәйәси харизма.** Тап үҙенсәлекле харизмаға (Хоҙайҙан бирелгән ылыҡтырыу һәләте) эйә булыу М. F. Рәхимовҡа бына оҙаҡ ваҡыт Рәсәйҙең иң абруйлы сәйәсмәндәре иҫәбенә инеү мөмкинлеген бирә. Башҡортостан Президентының һәр төрлө аудитория менән тиҙ арала бәйләнеш булдырыуы, сәйәси оппоненттарын ышандыра белеүе быға булышлыҡ итә.

**Сәйәси йәһәттән алдан күрә белеүсәнлек.** Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов сәйәси хәлде күҙаллай, һәр төрлө аҙымдың эҙемтәләрен алдан әйтеп бирә ала. Алдан күрә белеүсәнлеге яңы тарихтың иң ҡатмарлы һәм ауыр мәлдәрендә лә һынатманы. ССР Союзының тарҡалыуын, 1991 йылдың августағы ГКЧП сыуалыштарын, Президент Б. Ельцин менән Рәсәй парламентының 1993 йылдың октябрендәге фажиғәле ҡаршылыҡтарын ғына алайыҡ. М.F. Рәхимов республика, шулай уҡ үҙенең сәйәси абруйы өсөн дә ниндәй ҙә булһа юғалтыуҙарһыҙ ауыр хәлдән ҡотолоуҙың дөрөҫ юлын тапты.

**Килешеп эшләү һәләте.** М. F. Рәхимовтың иң ҡатмарлы хәлдән дә сыға, һығылмалыҡты принципиаллек менән берләштерә белеү һәләте 1992 йылдың 31 мартында Башҡортостан Республикаһынан Ҡушымта менән "Рәсәй Федерацияһы федераль дәүләт власы органдары менән Рәсәй Федерацияһы составындағы республикаларҙың власть органдары араһында хакимиәт даирәһе сиктәрен һәм вәкәләттәрҙе айырыу тураһында" Федератив договорға ҡул ҡуйыуға килтерҙе. Был дәүләттең берҙәмлеген һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген бирҙе. 1994 йылдың 3 августында Рәсәй Федерацияһы дәүләт власы органдары менән Башҡортостан Республикаһы дәүләт власы органдары араһында хакимиәт даирәһе сиктәрен айырыу һәм үҙ-ара вәкәләттәрҙе бүлешеү тураһында договорға ҡул ҡуйыу шулай уҡ уның ҡәтғи, бер үк ваҡытта компромислы позицияһы, уртаҡ эш итеү даирәһен таба, төп маҡсат хаҡына ҡайһы бер нәмәләрҙе ҡорбан итә белеүе, шулай уҡ субьекттар башлыҡтары араһында уның юғары абруйға эйә булыуы менән бәйле булды.

**Төп мәсьәләне айырып билдәләй белеү.** Ошондай үҙенсәлекле таланты һөҙөмтәһендә М. F. Рәхимов төп проблемаларҙы хәл итеүгә иғтибарын туплап, бер ваҡытта ла икенсе сираттағы мәсьәләләргә көсөн сарыф итмәй. Һәр төрлө хәлдә лә ул теге йәки был проблемаға үҙ фекерен йәшермәйенсә, асыҡ һәм анығ сәйәсәт үткәрә.

**Федерализм практигы һәм теоретигы.** Бөгөн Рәсәй Федерацияһында М. F. Рәхимов ысын федерализм сәйәсәтен ныҡышмалы һәм эҙмә-эҙлекле үткәреүсе дәүләт һәм сәйәси эшмәкәрҙәрҙең береһе булып тора. Ошо мөһим мәсьәлә буйынса позицияһын яҡлау өсөн М. F. Рәхимов киң мәғлүмәт сараларын, Дәүләт Советы трибунаһын, элегерәк Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советындағы ағзалығын, һәр төрлө аудиторияны һәр саҡ әүҙем файҙаланды.

**Рәсәй патриоты.** М. F. Рәхимов һәр саҡ Рәсәй дәүләтенең ысын патриоты, "Көслө төбәктәр - көслө Үҙәк" тезисы яҡлыларҙың береһе булды һәм булып ҡала. Вертикаль һәм горизонталь төбәк-ара бәйләнештәрҙе мөмкин тиклем нығытыуҙы һәр саҡ хуплай. Федерация субьекттарының хоҡуҡи киңлеген үҫтереү менән бер рәттән, Рәсәйҙең хоҡуҡи киңлеген үҫтереүгә булышлыҡ итә.

**Аныҡ позиция.** Һәр төрлө мәсьәлә буйынса аныҡ һәм тура позицияһы М.F. Рәхимовтың сәйәсмән булараҡ үҙенсәлеге булып тора. Уны нигеҙле итеп яҡлай, фекерҙәштәр эҙләй һәм тиҙ арала таба белә.

**Принципиаллек.** Айырым позициялар буйынса килешһә лә, М.F. Рәхимов бер ваҡытта ла төп проблемаларҙы иғтибарҙан ситтә ҡалдырмай, улар республика һәм уның халҡы мәнфәғәттәренә ҡағылһа, ҡәтғилек һәм ныҡышмалылыҡ күрһәтә.

**Батырлыҡ һәм яуаплылыҡ.** М.F. Рәхимов, һис шикһеҙ, ҙур ҡыйыулыҡҡа һәм ҡабул ителгән ҡарарҙар өсөн яуаплылыҡҡа эйә. Был йәһәттән үткән быуаттың 90-сы йылдары, дәүләт төҙөлөшөнөң тейешле тәжрибәһенә эйә булмаған осор айырыуса ҡатмарлы булды, республика өсөн дөрөҫ юлды һайлау, федерализмды үҫтереү, Башҡортостан менән Федераль үҙәк араһындағы мөнәсәбәттәрҙе билдәләүҙең байтаҡ мәсьәләләрен йылдам һәм кисекмәҫтән хәл итергә тура килде. Республиканың күп милләтле халҡы алдында ҡабул ителгән ҡарарҙар өсөн Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ғәйәт ҙур яуаплылыҡҡа эйә булды. Ошондай яҙмышты хәл иткес мәлдәрҙә ул хаҡлы һәм хатаһыҙ ҡарарҙар ҡабул итте.



**Хеҙмәтте баһалау.** М.F.Рәхимовтың эшмәкәрлеге дәүләт һәм йәмәғәтселек тарафынан лайыҡлы баһаланды. Ул П дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн", Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы, "Почет Билдәһе", "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн", Салауат Юлаев, Бөйөк Петр ордендары, бик күп йәмәғәт наградалары, Исемле ҡорал менән бүләкләнгән. Рәсәй Федерацияһы Президентының рәхмәт хаттары, Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы Федерация Советының Почет грамотаһы, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең Почет грамотаһы, абруйлы милли премиялар менән бүләкләнде. "РСФСР-ҙың атҡаҙанған рационализаторы" һәм "Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған нефтсеһе" тигән маҡтаулы исемдәргә эйә.

**Халыҡтың баһаһы.** Киң күләмдәге сәйәсмән булараҡ, М.F. Рәхимов халыҡ араһында ҙур абруй ҡаҙана, кешеләр менән аралаша, ябай халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе күрә һәм хәл итә белә. Был йәһәттән уға һәр саҡ ябайлыҡ һәм кешелеклелек, ҙур тормош тәжрибәһе һәм аҡыл ҡеүәһе булышлыҡ итә.

Бөгөн беҙ Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең һәр гражданы белгән һәм ихтирам иткән кешенең тыуған көнөн билдәләйбеҙ. Мортаза Ғөбәйҙулла улын хаҡлы рәүештә халыҡ етәксеһе тип атарға мөмкин. Ул халҡы менән бергә, сөнки оҙаҡ йылдар дауамында бөтә көсөн һәм ниәттәрен ябай халыҡ ихтыяждарына, улар хаҡында хәстәрлек күреүгә, көнүҙәк проблемаларын хәл итеүгә, көндәлек тормошоноң сифатын яҡшыртыуға бағлай. М.F. Рәхимовтың үҙенсәлекле шәхесенең башҡаларҙан айырмаһы шунда: иң ҡатмарлы проблемаларҙы хәл иткәндә лә ул һәр саҡ халыҡ мәнфәғәттәренән сығып эш итә. Ҡаҡшамаҫ абруйының һәм халыҡ тарафынан хупланыуының тәрән тамырҙары ошоға ҡайтып ҡала. Башҡортостан халҡы 1993, 1998 һәм 2003 йылдарҙа республика Президентын һайлағанда уға берҙәм ышаныс белдереүе лә быға асыҡ дәлил. Республика парламентының 2006 йылдың 10 октябрендә үткәрелгән ултырышында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары В.В. Путин тәҡдиме буйынса сираттағы сроҡҡа Башҡортостан Республикаһы Президенты вәкәләттәрен биреп, М.F. Рәхимовтың кандидатураһын хуплап сыҡты. Ул саҡта Башҡортостан халҡы һайлаған 119 депутаттың барыһы ла тауыштарын Мортаза Ғөбәйҙулла улы өсөн бирҙе.

Республика халҡы уға ҙур ышаныс белдерә, сөнки М.F. Рәхимовта үҙҙәренең шатлыҡ-ҡыуаныстарына һәм борсолоу-көйөнөстәренә яҡын етәксене күрә. Башҡортостан халҡы барлыҡ яҡты өмөт-хыялдарын уның Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһында артабанғы эшмәкәрлеге, тормош көн дә дөрөҫлөгөн раҫлаған ул үткәргән сәйәсәт менән бәйләй.

**Константин ТОЛКАЧЕВ,**

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Сибайҙағы "Төҙөлөшкомплект" ойошмаһы был төбәктәге халыҡҡа арзан ғына хаҡҡа йорт һалып бирмәксе. Ағас брустан торған 100 кв. метр йортто күтәреү 140 мең һум тирәһе торасаҡ. Комплектҡа ишек, тәҙрә һәм башҡа кәрәкле материалдарҙы ла индерһәң, йорт хаҡы 230 меңгә барып баҫасаҡ, ти предприятие вәкилдәре.

✓ Дүрт меңдән ашыу башҡорт йәшәгән Һарытау өлкәһендә Башҡорт мәҙәниәте көндәре башланды. Юбилей саралары программаһын Ф. Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле концерты башлап ебәрҙе.

✓ Баш ҡала йәштәренең "Беҙ бергә" тип аталған документаль һәм художестволы фоторәсемдәр конкурсы бара. Ул Башҡортостандың үҙ ирке меән Рәсәй дәүләте составына инеүенә 450 йыл тулыуға арналған.

✓ Быйыл Башҡортостанда электрон мәғлүмәтле яңы сит ил паспорттары өлгөләре буйынса һынау үткәреләсәк. Был яңылыҡтың ҡасан ғәмәлгә ашырылыуы билдәле түгел, сөнки ул ҡиммәтле ҡоролма менән бәйле.

✓ Белорет районының Исмаҡай ауылында социаль-мәҙәни үҙәк төҙөлә. Сентябрҙә бында башланғыс мәктәп, спорт залы, китапхана, акушер-фельдшер пункты, почта һәм клуб урынлашҡан ҙур йорт файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Был үҙәктең нигеҙен һалыуҙа былтыр Башҡортостан Республикаһы Президенты үҙе ҡатнашҡайны.

✓ 11 февралдә Рәсәй Федерацияһының 80-ләп ҡалаһында, шулай уҡ Өфөлә лә бөтөн халыҡ саңғыға баҫасаҡ. "Рәсәй саңғыһы - 2007" был юлы 25-се тапҡыр старт ала. Был йыл һайын үткән сарала ҡатнашыусылар арта бара, быйыл унда 580 мең кеше ҡатнашасаҡ, тип көтөлә. Өфөлә иһә 15 меңләп кеше саңғыға баҫасаҡ. Программа шулай ҡоролған: 17 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар һәм малайҙар - 5 км-ға, ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар 10 км-ға ярыша. Еңеүселәр 21 февралдә Сочиҙа буласаҡ "Рәсәй саңғыһы - 2007" ярыштарына ебәреләсәк. Ярыштарҙа ҡатнашырға теләүселәр мандат комиссияһына мөрәжәғәт итергә тейеш.

✓ Италияла үткән биатлон буйынса Халыҡ-ара ярыштарҙа Рәсәйҙең йыйылма командаһы 21 команда араһында туғыҙынсы урын яуланы. Рәсәй командаһы составында Өфө егете Максим Чудов та бар.

✓ **Аҡсаны алмаштырыу өсөн номиналдан 3-7 процент түләргә тура килдe. Банктарҙың элекке кеүек "ярты хаҡҡа алабыҙ" тиеүе хәҙер законһыҙ буласаҡ. Аҡсаға килтерелгән зыян уның 55 процент майҙанынан артмаҫҡа тейеш.**



ҠУЛЛАНЫУСЫҒА

# Арзанды эҙләйһеңме?

**Шаулап-гөрләп Яңы йыл байрамы ла үтеп китте. Алда барыбыҙ ҙа тулҡынланып көткән 23 февраль һәм 8 Март байрамдары тора. Тимәк, байрам табынына ҡуйыласаҡ ризыҡтың күпмегә төшөрөн хәстәрләү өсөн магазиндарҙы, баҙарҙарҙы урап сығырға ла ваҡыт. Баш ҡаланың төп баҙарҙарындағы аҙыҡ-түлек хаҡтарын өфөләр яңыраҡ йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүсе "Симакс" үҙәге үткәргән мәғлүмәттәрҙән дә белә ала.**

Табында ит - төп ризыҡ. Баш ҡала бер килограмм итте уртаса 130-150 һумға һатып алырға мөмкин. Иттең иң арзаны Өфөнөң Киров районындағы ҡумәртәләп һатыу баҙарында булһа, иң ҡиммәте - Үҙәк баҙарҙа. Суска итенең иң арзаны, йәғни, бер килоһы 100 һумға "Юрматы" сауҙа комплексында һатыла. Башҡа сауҙа нөктәләрендә уның килоһы 140 һумғаса етә.

"Балыҡ көнө" үткәрергә теләүселәр Киров районындағы баҙарға йәки "Радуга" магазинына барһын. Унда, мәҫәлән, минтайҙың бер килоһы 55-57 һум торһа, бүтән урындарҙа был балыҡ 9-10 һумға ҡиммәтерәк. Шулай уҡ тауыҡтар ҙа Киров баҙарында күпкә арзан (69 һум). Ә тауыҡ түшкәләре "Юрматы"ла ни бары 56 һум ғына тора.

Аҡсаһын әләф-тәләф итмәҫкә теләгән хужабикәләргә тауыҡ йомортҡаһын Үҙәк баҙарҙан (ун данаһы 25,8 һум) йәки "Радуга"нан (25,5) һатып алыу ҡулайлыраҡ булыр. "Радуга"ла шәкәр ҡомо, үсемлек майы һәм макарондар ҙа башҡа магазиндарға ҡарағанда күпкә арзан.

Әйткәндәй, "Симакс" үҙәге былдай тикшереүҙәрҙе артабан ай һайын үткәреп торорға уйлай. Тимәк, өфөләр хәҙер ҡайҙа ҡайһы аҙыҡтың хаҡы күпме тороуы менән ай һайын хәбәрҙар буласаҡ.

# Мыйыҡ осона...

**Видеоплейер йәки видеомагнитофонды нисек һайларға? Иң тәүҙә, әлбиттә, һатып алырға тигән ныҡлы теләк кәрәк. Шунан инде уның төрҙәрен өйрәнеү фарыз.**

Видеомагнитофон менән видеоплейерҙың айырмаһы шунда: видеомагнитофонға тюнер беркетелгән. Был һеҙ телевизорҙан бер тапшырыуҙы ҡараған ваҡытта тюнер ярҙамында видеомагнитофон икенсе тапшырыуҙы яҙҙыра ала, тигәнде аңлата. Хатта телевизор ҡабынмағанда ла яҙыу мөмкинлеге бар.

Ә инде видеоплейерҙар тапшырыу барған ваҡытта тик шул тапшырыуҙы ғына яҙҙыра ала. Видеомагнитофонда фильмдарҙы монтажларға мөмкин. Видеоплейерҙа былдай мөмкинлек юҡ. Башҡаса улар бер-береһенән артыҡ айырылмай. Хаҡтарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә.

Видеоплейерҙар ике төргә бүленә: яҙа-күрһәтә һәм яҙмайынса, тик күрһәтә торғанға.

Видеомагнитофондар ике һәм дүрт башлыға бүленә. Ябай ике башлы видеомагнитофон видеоплейерға тартым. Ә инде дүрт башлыһының мөмкинлектәре, әлбиттә, күберәк.

Әле беҙ һеҙгә видеоплейер менән видеомагнитофон бер-береһенән ни яғы менән айырылыуын ғына һанап сыҡтыҡ. Улар менән нисек ҡулланырға икәнен, әлбиттә, һатыуҙа ҡушып бирелгән инструкцияларҙан уҡып танышырға була. Ә бына яңы аппаратураның мөмкинлектәре тураһында ошо өлкәлә белеме, мәғлүмәте булған белгестән төпсөнөп һорашырға кәрәк. Тауарҙың сифатын иһә ваҡыт һынай. Һатыусыларҙың баш ҡатырғыс вәғәҙәләренә, рекламаһына ышанырғамы-юҡмы - уныһы һеҙҙең ихтыярҙа.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Ғафури районының боронғо ауылдарының береһе Сәйетбаба ауылы халҡы йыр-бейеүгә маһир таланттарҙан тыш, борондан һаҡланып килгән төрлө кәсепселек оҫталарына бай булыуы менән дә данлы.**

# СӘЙЕТБАБАЛАР...

## иң дәртлеһе

Унда ағас һырлау, ағастан мебель һәм башҡа йорт кәрәк-яраҡтары эшләү, туҡымасылыҡ менән шөғөлләнгән һәм башҡа һөнәр эйәләре бихисап. Сәйетбабалар башҡорт халҡының милли ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, йыр-моң ижадын һаҡлауға, уларҙы йәш быуынға тапшырыуға айырыуса ҙур иғтибар бирә. Юҡҡамы ни, сәйетбабаларҙың тирмәһе бөтөн байрамдарҙа ла беренсе урынды ала! Ә инде Байбулдиндарҙың музыкаль ғаиләһе бөтөн республикаға билдәле. Ғаилә башлығы музыка уҡытыусыһы, ҡурайсыларҙың Йомабай Иҫәнбаев исемендәге республика конкурсы лауреаты Илһам Байбулдин милли музыка ҡоралдары эшләүҙән тыш, йырҙар ҙа ижад итә.

Яңыраҡ ауыл мәҙәниәт йортоноң фольклор коллективы Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына арналған үҙенсәлекле әҙәби-музыкаль композиция әҙерләп, тамашасылар иғтибарына тәҡдим итте. Фольклор төркөм сәсән һүҙе, йыр һәм бейеүҙәр аша дүрт быуат элекке ваҡиғаларҙы тулҡынландырғыс итеп һүрәтләне. Ҡобайырҙарҙың, бәйеттәрҙең йыр-бейеү менән аралашып барыуы, һәүәҫкәр артистарҙың 12 йәштән алып 70 йәшкә тиклем булыуы тамашаны тағы ла тәбиғиерәк һәм унда барған ваҡиғаларҙы, табын ырыуы башҡорттарының көнкүрешен, тормошон, йолаларын тағы ла ышаныслыраҡ итеп күҙәләндерҙе...

"Асанай", "Мөнәжәт" һәм "Йәнекәй" тип аталған фольклор ансамблдәре, солистар Зөһрә Вәлиева, Фәниә Фәйзуллина, Миңнур Исхаков, йәш ҡурайсылар ансамбле һәм башҡа артистар үҙҙәренең юғары сәхнә оҫталығы менән тамашасыларҙы әсир итте.

Ауыл халҡы сәйетбабалар араһынан үҫеп сыҡҡан яҙыусылар, ғалимдар, сәнғәт эшмәкәрҙәре менән хаҡлы ғорурлана. Ысынлап та, бында айырым бер ижади мөхит хөкөм һөрә. Уның һаҡланып ҡалыуына тәбиғәттең гүзәллеге, башҡорттарҙың бай тарихи үткәне һәм милли йолаларының юғалмауы ла йоғонто яһайҙыр. Шулай уҡ 2003 йылда асылған "Сәйетбаба ауылы" тигән тарихи-мәҙәни үҙәк тарафынан башҡорт халҡының бик күп милли байрамдары тергеҙелдe. Унда халыҡ оҫталары өсөн тиҫтәләгән түңәрәктәр эшләй. Уларҙы һанап та бөтөрләк түгел. Ә аяҡҡа баҫтырылған милли байрамдар, туй, төрлө өмәләр үткәреү, бала табыуға бәйле һәм башҡа йолалар үткәреү - һәр береһе халыҡ өсөн көтөп алынған байрамға әүерелдe.

**Марина ШУМИЛОВА.**
**"Башинформ".**





ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Рәсәйҙең бөтөн кредит учреждениелары халыҡтан йыртыҡ, ямалған, оҙаҡ ҡулланыуҙан иҫкереп төсһеҙләнгән, хатта сыҫҡан кимергән аҡсаларҙы ла ҡабул итергә бурыслы.**

# Йыртыҡ аҡсаларҙы...

## банкҡа тапшыр...

Юстиция министрлығы Үҙәк банктың банктарға аҡсаны алмаштырғанда бөтөрөләргә тейешләләрен тоткарламауҙы йөкмәтеүсе бойороғон теркәне.

Әлегә тиклем ошондай операцияларҙы үтәүсе банктарҙы көндәҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табырлыҡ түгел ине. Тапҡан хәлдә лә аҡсаны алмаштырыу өсөн номиналдан 3-7 процент түләргә тура килдe. Банктарҙың элекке кеүек "ярты хаҡҡа алабыҙ" тиеүе хәҙер законһыҙ буласаҡ. Аҡсаға килтерелгән зыян уның 55 процент майҙанынан артмаҫҡа тейеш. Үҙәк банктың яңы документына ярашлы, аҡса бик ныҡ туҙып, ун урындан йәбештерелгән булһа ла алмаштырылырға тейеш. Ҡағыҙ аҡсаларҙың төҫө уңып, үтә ҡарағанда һүрәттәр тоҫмалланһа, банк уны алыштырырға бурыслы. Тимер аҡсалар ҙа йәнселеүгә, йәмшәйеүгә, ҡырылыуға ҡарамаҫтан, бер һүҙһеҙ алыштырыласаҡ. Иң мөһиме - уларҙың билдәләре һаҡланһын.

Туған валютаны алыштырыу ҡатмарлыраҡ. Ундай валютаны алыштырыу-алмаштырмау һеҙгә тура килгән банк хеҙмәткәренән тора, сөнки күптәре иҫкергән долларҙы йәки евроны алыуҙан ҡырҡа баш тарта, йә булмаһа, операция суммаһынан 3-10 процентҡа тиклем алып ҡала. Туған валютаны алыштырыуҙың әлегә бер генә юлы бар: әгәр клиент ныҡышһа, банк уны инкассаға алып, зыянды ҡаплауҙы хәл итһендәр өсөн сит илгә кире ебәрә ала. Тик уның бер хилаф яғы бар, ул да булһа, банктарҙың күбеһе инкассаға сит ил валютаһын ғәҙәттә 10 мең долларҙан башлап, тағы ла ҙурыраҡ суммала ғына алыусан. Ә 1,5 һәм 10 доллар менән иҫәпләшеп тә тормайҙар.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә хакимиәттең иктисад идаралығы начальнигы Ольга Краснова 2006 йылда ҡаланың маҡсатлы программаларының үтәлеше һәм финансланыуы тураһында мәғлүмәт менән сығыш яһаны. Былтыр 25 программа ҡабул ителгән. Уларҙың үтәлеше өсөн 1,5 млрд һум аҡса бүленгән.

☑ Былтыр ҡалала һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереүгә 83,4 млн. һум, планға ҡарата 99,4 процент аҡса бүленгән, шуның 33,3 млн һумы ҡала бюджетынан.

☑ Былтыр "Йәш өфөләргә - торлаҡ" программаһы сиктәрендә 230 йәш ғаилә үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан.

☑ Өфөнөң торлаҡ баҙарында хаҡтар тағы күтәрелә башланы. Бер бүлмәле фатир хаҡы былтырғы декабрь айы менән сағыштырғанда 2,3 процентҡа күтәрелеп, 1 кв. метры 57,52 мең һумға еткән. Ике бүлмәле фатирҙың кв. метры иһә 54,7 мең һум тора. Шулай итеп, баш ҡалалағы иң арзан бер бүлмәле фатирҙы 950 мең һумға табып була. Ә ҡиммәтле 18,5 миллионлыҡ дүрт бүлмәле фатирҙы Чернышевский урамында һатып алырға була. Иң арзанлы бүлмә 650 мең һумға Ушаков урамында һатыла.

☑ Иктисад өлкәһендә эшләүсе өфөләрҙең дүрттән бер өлөшө эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Дөйөм алғанда, Өфөләгә эшҡыуарҙар берләшмәһе 14 мең кесе предприятиены һәм 20 мең эшҡыуарҙы үҙ эсенә ала.

☑ Былтыр Өфөлә сауҙа предприятиелары тауар әйләнешен арттырған, йәғни ваҡлап һатыу тауар әйләнеше 128,8 млрд һум тәшкил иткән. Бөгөн ваҡлап һатыу сауҙаһы һәм дөйөм туҡланыу селтәре 5 меңдән ашыу объектты үҙ эсенә ала. Ҡалала шулай уҡ баҙар сауҙаһы тәртипкә килтерелә. Социаль магазиндар һаны ла арта, ул 87-гә етте.

☑ 16 февралдә 19 сәғәттә Өфө моторҙар төҙөүселәр мәҙәниәт йортонда Халыҡ-ара конкурстар лауреаты "Мираҫ" фольклор бейеү ансамбленең концерты буласаҡ.

☑ 19-23 мартта шаяндар һәм тапҡырҙарҙың "Шаяниум - 2007" асыҡ фестивале үтәсәк. Уны Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты менән мәғариф идаралығы ойоштора.

www.ufacitu.info

***✓ Рәми ағай кеүек, тормоштағы ғәҙелһеҙлектәр менән килешә алмайым. Ул маҡсат ҡуйып, һайлаған юлынан тайпылмаған, идеяһына тоғро ҡалған. Мин дә маҡсатыма ирешергә ынтылам.***

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Рәми Ғариповтың тыуыуына 75 йыл тулыуҙы билдәләгән был көндәрҙә уның исемен йөрөткән 1-се Республика башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары менән осрашып, уларға: “Гимназияға уҡырға килгәнгә тиклем Рәми Ғарипов тураһында нимәләр белә инегеҙ? Рәми Ғариповтың "Киске Өфө" гәзитендә баҫылған көндәлектәрен уҡығанһығыҙҙыр. Шул саҡтағы бала күңеле менән һеҙҙең күңелегеҙ, тормошҡа ҡарашығыҙ, маҡсатҡа ынтылыш, дуҫлыҡҡа мөнәсәбәт йәһәтенән ниндәй оҡшашлыҡтар, айырмалыҡтар бар?” - тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек:**

# ШАҒИР РУХЫ...
## балаларҙа

**Амур ЯРУЛЛИН:**

● Ауылдағы уҡытыусыларымдан төплө белем биргән гимназия икәнен ишетеп һәм уларҙың кәңәше буйынса уҡырға килдем. Рәми Ғариповтың ижадын мәктәптә уҡығанда уҡ өйрәнә башлағайныҡ инде. Айырыуса "Туған тел" шиғыры беренсе тапҡыр уҡығас та күңелемә уйылды. Беҙҙең көндәрҙә лә ошондай тура фекерле, аҡыллы, мәҙәниле, юғары белемле шәхестәр күп булһа ине. Беҙҙең тормошҡа ҡараш, фекерҙәр араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡтар барҙыр, тип уйлайым. Мине лә милләт, йола, башҡорт халҡының, теленең яҙмышы, киләсәге уйландыра.




**Юлиә ДИЛМӨХӘМӘТОВА:**

● Әсәйемдең башҡорт теле уҡытыусыһы булыуы һәм бәләкәйҙән үк башҡорт әҙәби әҫәрҙәрен уҡып үҫкәнгәме, Рәми Ғариповтың да ижадын яҡшы беләм. Көндәлектәрен ошо уҡ гимназияла уҡығанда яҙғанлыҡтан, беҙгә ундағы хәл-ваҡиғалар, үҫмерҙең хыялдары ныҡ яҡын. Ғөмүмән, Рәми Ғариповты үҙемдең идеалым тип күрәм, шуға ла күп йәһәттән уға оҡшарға тырышам. Мәҫәлән, Рәми ағай кеүек, мәктәпте тамамлағас, юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, халҡыма файҙа итерҙәй шәхес булырға, тигән маҡсат ҡуйғанмын.

**Дим БАЙНАЗАРОВ:**

● Бәләкәй саҡта беҙҙең өйҙә Рәми Ғариповтың китаптары күп ине, апайым Рәми Ғариповтың бынау китабын уҡып сыҡ әле, бигерәк матур, фәһемле яҙылған, тип маҡтай торғайны. Башҡортостанда шағирҙар күп һәм үҙем дә бәләкәйерәк булғас, уның ижадының бөйөклөгөн аңлап еткермәгәнмен. Туғыҙынсы класта уҡы-ғанда уның һутлы тел менән яҙылған матур, үҙенсәлекле шиғырҙарын уҡып сыҡҡас, Рәми Ғариповҡа һоҡланыуым, ихтирамым артты. Уҡытыусымдың ошо гимназияла уҡыған улы гимназия тормошо хаҡында һөйләп: “Дим, һин ошо гимназияла уҡый торған егет”, - тип мине дәртләндерҙе. Рәми Ғарипов - халҡым, телем, илем тип йәнен фиҙа ҡылған шағир. Минең дә маҡсатым - юғары белемгә эйә булып, телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү, халҡыбыҙҙың яҡты киләсәгенә өлөш индереү.

**Гөлдәр ҒӘЛИМОВА:**

● Бәләкәйерәк синыфтарҙа шағирҙың ижадын ентекле өйрәндек, шуға күрә ижадын яҡшы белеү генә түгел, шиғырҙарын яттан беләм. Көндәлектәрен, ысынлап та, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сыҡтым, уның хаттары күңелемдә ниндәйҙер оло тойғо уята. Көндәлектәрен уҡый башлағас, үҙемде уның урынында күҙ алдына килтерҙем. Рәми ағай кеүек, тормоштағы ғәҙелһеҙлектәр менән килешә алмайым. Ул маҡсат ҡуйып, һайлаған юлынан тайпылмаған, идеяһына тоғро ҡалған. Мин дә маҡсатыма ирешергә ынтылам. Ә дуҫтарым күп түгел, ысын дуҫтар күп булмай ул.

**Фәнил ТОРОМТАЕВ:**

● Мәктәптә уҡығанда уҡ Рәми Ғариповтың шиғырҙарын яттан һөйләп йөрөй инек. Бер нисә быуын туғандарым - тотош династиябыҙ ошо гимназияла уҡып сыҡты тиергә лә була. Шуға ла был гимназия, унда уҡыуҙың киләсәккә күп мөмкинлектәр асыуы хаҡында ишеткәнем бар ине. Ә үҫмер Рәми һәм үҙемдең тормошҡа ҡарашымды сағыштырырға ҡыйыулығым етмәй. Беҙҙең тормошҡа ҡараш, маҡсатҡа ынтылыш яғынан айырма ҙур. Маҡсаттарым бөйөк шағирыбыҙҙыҡы кеүек ҙур булмаһа ла, гимназияны миҙалға тамамлап, юғары уҡыу йортона инергә, лайыҡлы эш урыны табырға, тигән ниәтем бар. Көндәлектәрҙәге Рәми ағай менән ниндәйҙер оҡшашлыҡ та бар кеүек: дуҫтарыма тураһын әйтә алам.

**Лилиә ӘҘЕЛГИЛДИНА:**

● 7 класта уҡығанда башҡорт теле уҡытыусыһы Рәми Ғариповтың "Йырҙарыма ҡайтам" тигән йыйынтығын бүләк иткәйне. Уның шиғырҙарының тәрәнлеген, бәлки, ул ваҡытта аңлап та етмәгәнмендер. Был гимназияға килгәс, уның көндәлектәре менән таныштым. Үҙем өсөн шундай асыш яһаным: ул да беҙҙең юлдан үткән, ошо уҡ гимназияла уҡыған, ул пилот булырға хыялланһа, ә минең төплө генә маҡсатым юҡ. Минең бер маҡсатым - күңелем ни теләй, шуға ирешкем, донъяның матурлығын, тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәгем килә. Үҙеңдең күңелең саф, йөҙөң яҡты булһа, дуҫтар табыуы ла ҡыйын түгел ул, ә Рәми Ғарипов ысын дуҫ була белгән. Дөрөҫөн әйтә белгән, ә мин кешенең күҙенә ҡарап тураһын әйтергә баҙнат итмәйем.

**Фаягөл ЮНЫСОВА:**

● Гимназияға килгәс, үҙем дә көндәлектәр алып бара башланым. Рәми ағай көндәлектәрендә яҙылғанса, ул осорҙа балалар араһында халыҡсанлыҡ, ихласлыҡ булған, шуға һоҡландым, ә беҙҙең көндәрҙә былдай сифат бигүк етешмәй. Күп нәмә аҡсаға ҡоролған, телем, илем тигән уй менән халҡы өсөн йәшәгәндәр һирәк. Мине лә ил, милләт проблемалары битараф ҡалдырмай. Ғүмеремде телебеҙҙе үҫтереүгә арнап, ошо йүнәлештә яҡшы белгес булырға теләйем.

**Гөлдәр ИЛЕМБӘТОВА:**

● Рәми Ғариповтың шиғырҙарын бәләкәйҙән уҡып үҫтем. Апай-ағайҙарым да ошо гимназияла белем алған, хатта бер олатайым Рәми Ғарипов менән класташ та булған. Уның шағирҙы тик яҡшы яҡтан ғына һүрәтләгән иҫтәлектәрен тыңлап, Рәми Ғариповҡа оҡшарға тырышып үҫтем. Башҡортостаныбыҙҙың киләсәге яҡты, ышаныслы булһын өсөн тыуған илемә файҙа килтерерҙәй кеше булырға хыялланам. Мин дә Рәми Ғарипов кеүек көндәлектәр алып барам, уны борсоған милли мәсьәләләр минең дә күңелемә тынғы бирмәй.

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөйөк шағирыбыҙ исемен йөрөткән гимназияла уҡыған балаларҙың рухлы, ил, тел, милләт яҙмышы менән янып йәшәүҙәре, күңелдәрендә рух, ғәм, сәм йөрөтөүе осраҡлы түгелдер. Был Рәми Ғарипов әҫәрҙәрен уҡып үҫкән ата-әсәләрҙең, гимназияла белем биргән уҡытыусыларҙың балалар күңеленә шағир рухын еткерә алыуы, үҙҙәренең дә бөйөк шағирыбыҙ рухына тоғро ҡалыуын дәлилләй.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# Ыҫланған ит тә,
## колбаса ла ашатма балаға

**Был ризыҡтарҙы балаларға ашатыу тыйыла:**

сейләй ыҫланған ит һәм колбаса аҙыҡтары. Бәшмәктән әҙерләнгән аҙыҡтар, һыу ҡоштарының ите һәм йомортҡаһы, ҡыҙҙырылған тауыҡ йомортҡаһы, ит йә йомортҡа ҡушып бешерелгән макарон, окрошка, кеүәҫ, ҡулдан әҙерләнгән һалҡын, татлы һыу.

Таҙартылмаған әсе һөттән өй шарттарында әҙерләнгән аҙыҡтар, ҡайнатылмаған һөт, итле ҡоймаҡ, ит һәм балыҡ ҡойҡаһы, төрлө паштеттар, кремлы торт һәм пирожныйҙар, составында организмдың туҡымалар үҫешенә тоткарлыҡ яһауsы элеутерококк, женьшень, родиола кеүек зыянлы ҡатнашмалар булған биологик актив матдәләргә бай аҙыҡтар, кофе һәм кофеинлы эсемлектәр, алкоголь, майонез, кетчуп, һелте, горчица, керән, борос һәм башҡа әсе аҙыҡтар, газлы һыу, яһалма еҫле эсемлектәр.

Быларҙың барыһы ла балалар баҡсаларында тәрбиәлә-неүселәр һәм мәктәп уҡыусылары табынына ҡуйылырға тейеш түгел.

**Мәктәп буфетында ошолар һатылырға тейеш:**

һыуҙа йыуып таҙартылған емеш-еләк һәм йәшелсә, газһыҙ таҙа һыу, ҡаплы һут һәм нектарҙар, әлморон һыуы йәки әлморон сиробынан әҙерләнгән эсемлек, һөтһөҙ һәм һөтлө сәй, һөтлө какао, һөтлө кофе эсемлеге (кофе түгел).

Йогурт, ҡайнатылған һөт һәм ҡаплы пудинг, ҡағыҙға төрөлгән берәр порциялы эремсек һәм эремсекле сыр, кәмендә ике-өс төрлө икмәк-булка, арахистан башҡалары ҡыҙҙырылмаған һәм тоҙланмаған өрөктәр (ҡаптарҙа булырға тейеш), балалар өсөн сырҙар, ярма һәм картуфтан (майҙа ҡыҙҙырылған чипсы фәлән түгел) әҙерләнгән иртәнге аштар, укроп менән һарымһаҡтан башҡа тәмләткес ҡушылмаған сохари, винегрет һәм салат, ҡаплы прәник, коврижка, вафли, рулет, кекс, крем ҡушмайынса үҙаллы әҙерләнгән кондитер аҙыҡтар, сыр һәм ярым ыҫланған колбасалы йылы бутерброд, ҡапҡа һалынған туңдырма (туңдырғыстан ғына алынһын), тәбиғи какаонан әҙерләнгән шоколад (йыш түгел).

## Б Ә Л Ә К Ә Й   Ҡ А М У С

# БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ



### Израиль

Иерусалим ҡалаһы Йәһүд тауы ҡаяларында урынлашҡан. Уны кешеләргә Закон биреү өсөн Аллаһы Тәғәлә һайлап алған ҡала тип йөрөтәләр. Иерусалимдың бейек убаларына баҫып Христос һәм бәйғәмбәрҙәр вәғәз уҡыған. Ғөмүмән бөтә диндарҙар өсөн дә тарих Иерусалимдың ошо Изге тауынан башлана.

Йәһүдтәр өсөн Изге тау уларҙың боронғо тарихы һәм киләсәккә өмөт символы; христиандар өсөн - Иисус Христостың үлеп яңынан терелеп һуңғы хеҙмәте үткән изге урын; мосолмандар өсөн риүәйәт буйынса Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең күккә олғашҡан урын булараҡ изге ер һанала. Ләкин Иерусалим ер йөҙөнә тыныслыҡ һәм дин килтереүсе, кешеләрҙе бер-береһен яратырға өндәүсе ҡала ғына түгел, ә туҡтауһыҙ фетнә, террор һәм ҡан ҡойоштар ҡалаһы булып та тарихҡа инә.

Иерусалим үҙ тарихында 50 тапҡырҙан ашыу ҡамауҙа ҡала, 36 тапҡыр баҫып алына һәм ун тапҡыр ер менән тигеҙләнгәнсе ҡыйратыла. Уның боронғо өлөшөндә донъялағы өс иң ҙур дин йәғни йәһүд, христиан һәм мосолман диненә ҡағылышлы ҡомартҡылар һаҡланған. Боронғо замандарҙа йәһүдтәрҙең сәскә атыусы кварталдары һәм бөтөн гүзәл ҡорамдар Иерусалимдың йөрәгендә йәғни Юғары ҡала тип аталған матур ерендә урынлашҡан. Унда йәшәүселәр үҙҙәрен донъялағы ун матурлыҡтың туғыҙ ҡанунына эйәбеҙ тип һанаған.



Беҙҙең эраға тиклем 70 йылда император Тит, халыҡтың сираттағы бер күтәрелешен рәхимһеҙ рәүештә баҫҡас, Иерусалимдың ғорурлығы һаналған иң матур, иң ҙур ҡорамын емерергә бойора. Ләкин уның көнбайышындағы бер стенаһы тулыһынса емерелеп бөтмәй һәм ул беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡала. Йәһүдтәр уны Һыҡтау стенаһы тип исемләй һәм әле булһа унда килеп ҡорамды иҫләп илайҙар.

**✓ Кеҫә ҡалынайтырға теләүселәр бындай уңайлы мөмкинлекте, ҡулдан ысҡындырмаясаҡ, ә урындағы халыҡ кемгәлер хеҙмәтсе булып ҡаласаҡ. Быны аңлап, халыҡ араһында аңлатыу эше алып барыусылар бөтөнләй юҡ.**



ИМ-ТОМ

# БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАЛАРЫ

**Ҡарға ҡанаты менән имләү**

Әгәр кешенең башы йыш ауырыһа, тәнен ҡарға ҡанаты менән һыйпап, шул ҡанатты эстән кейемдең күренмәгән еренә тегеп ҡуйғандар.

**Баш әпсене**

Иҙән аҫтында тимер бүкән, уның өҫтөндә ҡарсыҡ, инәһе ҡоңғор, ебе ҡыҙыл, име-томо шул булһын! Тфү, тфү, тфү!

**Башты имләү**

Баш ныҡ ауыртһа, йүкә менән уратып бәйләп, ҡолаҡ тапҡырынан һыҙалар. Йүкә ҡайһы яҡҡа оҙонораҡ, мейе шул яҡҡа ауған була. Ауһа, башҡа таҫтамал бәйләп, таҫтамалға һуғалар.

**Баш һылау име**

Сирләгән кешенең башын да, аяҡтарын да мендәргә һалып, сикәһен һылағандар. Ауырыуҙың йоҡоһо килһә, йоҡлаған. Уянғас, уға күмәс менән сәй эсергәндәр.

**Баш ауырыуынан бетеү**

Кешенең башы ныҡ ауыртһа, бетеүҙе башына, үрмесенә тағаһың. Башҡа ере ауыртһа ла ауыртҡан еренә бетеү тағырға кәрәк. Элек һәр ауырыуҙың үҙ бетеүе булған. Ә баш ауыртҡанды бөтөрөү бетеүен төрлө һыҙыҡтар менән өс юл яҙып әҙерләгәндәр.

**Бетеүҙе толомға ҡушып үреү**

Бетеү - ул доға. Уны өсмөйөшләп сепрәккә тегеп эшләгәндәр. Баш ныҡ ауыртһа, сәсте үргәндә толомға ҡушып үргәндәр.

**Мейе ултыртыу**

Баш ауыртһа, мейе төшкән, тиҙәр. Таҫтамалды башҡа бәйләп, ҡаҡҡылап, мейене урынына ултыртҡандар. Имләгәндә ошолай тип тә һамаҡлағандар:

Баш бармаҡ, ҡыҙыл еп,
Төк-төк төкөмә.
Һуҡ бармаҡ, һары еп,
Төк-төк төкөмә.
Урта бармаҡ, күк еп,
Төк-төк төкөмә.
Сәтәкәй бармаҡ, аҡ еп,
Төк-төк төкөмә.
Бына һиңә биш айыл,
Дүңгәк булып ҡыйыл.
Ары-бире, ары-бире,
Ултыр сатҡа кире.

**Төйөнгә һуғып имләү**

Мейе төшһә, башты еп менән ҡоршайһың да маңлайҙан, елкәнән, ҡолаҡ тапҡырынан һыҙып билдәләгәс, уларҙы ҡара-ҡаршы тотоп, һыҙыҡтарҙың тура киләме-юҡмы икәнен ҡарайһың. Тура килмәһә мейе урынынан ҡуҙғалған булып сыға. Аҙаҡ башты таҫтамал менән уратып бәйләп, уға һуғаһың да:

-Төштөмө?- тип һорайһың да һуғаһың, һорайһың да һуғаһың.

Һораған һайын ауырыу:

-Төштө,- тип яуап бирә. Шунан башты яңынан үлсәп, мейе урынына ултырғанын күргәс, епте өҙөп ташлайһың.

**Епте түңәрәккә элеү**

Мейе төшкәнен үлсәгән епте түңәрәккә элеп китһәң, баш ауыртыуы бөтә. Тик түңәрәккә элгәс, уға боролоп ҡарарға ярамай.

**Мейене төҙәтеү**

Мейе алға күскән булһа, имсе ултырғыстағы ауырыуҙың артына баҫҡан хәлдә, башта таҫтамал менән уратып ала ла уны елкәлә бороп ҡуя. Унан һуң таҫтамалды һул ҡулы менән елкәлә тотоп, "Урыныңа ултыр!" тип, уң ҡулы менән һул ҡулына ҡаты итеп һуға.

**Мейе үлсәү**

Мейе ҡағыусы бер ҡулы менән башын елкә яғынан, икенсеһе менән маңлайынан тотоп, бер нисә тапҡыр иҙәнгә һуға. Һуҡҡанда яңғырауыҡлы тауыш сыҡһа, мейе урынынан күскән була, бындай тауыш булмаһа, урынында дөрөҫ ултыра.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

**"Башҡорттарҙың им-том китабы".**



**Күҙ алдына килтерегеҙ: алдығыҙҙа матур итеп алтындан һырлап эшләнгән арыҫлан һыны. Иҫегеҙ китеп, күҙҙәрегеҙҙе майландырып, алтынға ҡараһағыҙ, арыҫланды күрмәйәсәкһегеҙ. Арыҫландың һомғол һынына ҡарап һоҡланһағыҙ, уның ниндәй материалдан эшләнеүенә иҫегеҙ китмәйәсәк. Ер менән дә шулай. Тыуған ерҙе, хозур тәбиғәтте байығыу сығанағы тип, тик иҡтисади күҙлектән ҡарағандар өсөн ул алтындан эшләнгән арыҫланға бәрәбәр. Бөгөн уларҙың һүҙе өҫтөн. Шуныһы үкенесле: намыҫ күҙлегенән, тыуған илгә, уның тәбиғәтенә һөйөү менән ҡарағандарҙың тауышы бушлыҡҡа оса кеүек. Әлбиттә, бушлыҡты изге төшөнсәләр менән дә, яуыз ниәттәр менән дә тултырырға була. Әммә бөтөн парадокс шунда: тарих иләге аша үткәндә рухи ҡиммәттәр мәңгелеккә юллана, сүп-сар күңелгә шом һалып, иләктә ятып ҡала. Алтын ҡиммәтме беҙгә, әллә матурлыҡмы? Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Румиль Тәлғәт улы АҘНАБАЕВ менән һөйләшкәндә арыҫландың һомғол һыны күҙ алдына баҫа, ә уның алтындан булыуы түгел.**

## Өҫтағандың өс терәүе

Ер мәсьәләһе буйынса бөгөн ҡоролтайҙы төп өс һорау борсой. Беренсенән, Башҡортостан ере күптән Рәсәй Федерацияһы составына ингән. Шулай булғас, ниңә республика ерҙәрен тағы ла федерацияға алалар? Был һис тә аңлашылмай. Ярай, федерацияға ҡараған предприятиелар урынлашҡан ер уларҙың милке. Беҙ бит ваҡытында үҙ еребеҙ, урмандарыбыҙ менән Рәсәй составына ингәнбеҙ. Хәҙер Рәсәй дәүләте ҡарамағындағы урмандарҙан тыш, ауыл хужалығы урмандарын да алалар. Закон сығарыусыларҙы аңлап булмай. Улар, күрәһең, беҙҙе федерация составынан сығарырға итә. Ерҙе алған хәлдә лә, ул ҡуртымға алынырға тейеш һәм ул ерҙәр өсөн алынған һалым кире федерация ҡаҙнаһына китергә тейеш түгел. Был - бер мәсьәлә.

Икенсенән, федерация ерҙәре тип рәсмиләштерелгән ерҙәргә бер ниндәй тикшереү, күҙәтеү юҡ. Беҙҙең анализ буйынса, федерация ерҙәре тип рәсмиләштерелгән майҙан менән республика күрһәткестәре араһында бик ҙур айырма килеп сыға. Рәсмиләштерелгән майҙан бик күп һәм ул республика буйынса бирелгән күрһәткестәрҙән ныҡ айырыла. Мәҫәлән, урман фонды рәсмиләштергән майҙан 5 млн 265 мең гектар. Беҙҙең күрһәткестәр буйынса - 5 млн 66 мең гектар. Тимәк, 199 мең гектар бирелмәгән булып сыға. Был майҙан һауала аҫылынып тора. Федералдар ерҙе күпме теләй, шунса алыуын дауам итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был урман майҙаны буйынса ғына түгел. Мәҫәлән, халыҡ йәшәгән урындарҙың (земли поселения) 673 гектары "һауаға аҫылынған", йәғни федералдар алған, ә республика күрһәткесендә ул майҙан бирелмәгәнгә иҫәпләнә. Сәнәғәт предприятиелары урынлашҡан ерҙәрҙең 7 мең гектарҙан ашыуы шулай рәсмиләштерелгән. Был ерҙәр ҡабалан рәүештә быйыл "алынған". Бик аяныслы хәл: иҫәпләп ҡараһаң, шул рәүешле беҙҙеке тип иҫәпләнгән 419 мең гектар ергә күптән инде федераль документ төҙөлгән. Ауыл хужалығы ерҙәре закон буйынса республика ҡарамағында булырға тейеш тә бит. Әммә, мәҫәлән, 119-сы йылҡысылыҡ заводының 2223 гектар майҙаны республика Законына ҡаршы барып, рәсмиләштерелгән. "Дмитриевка" совхозының 182 гектар ауыл хужалығы ере федерацияға "киткән". Өфө ҡалаһының уртаһындағы 7 гектар ергә ( Совет районы, Владивосток урамы) шулай уҡ рәсми таныҡлыҡ бирелгән.

Өсөнсөнән, "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен яйға һалыу тураһында"ғы Закон сығып, БР Хөкүмәте ҡарары ҡабул ителеүгә ҡарамаҫтан, райондарҙағы ауыл хужалығы ерҙәре һаман да шәхси милек булараҡ теркәлмәй. Ирекһеҙҙән, был хәл кемгәлер бик ҡулайлы тигән фекер тыуа: ерҙе кем теләй, шул ала. Халыҡ белмәй, уны ҡурҡыталар. Көрсөккә терәлгән хужалыҡтарҙың элекке хужалары ерҙе үҙ-ара бүлешә лә башланы. Әлбиттә, ойошоп, дәррәү эшләгән хужалыҡтар күп, әммә ер мәсьәләһенә ҡарата һәр бәләкәй генә риза һыҙлыҡ та хафа уята. Был - өсөнсө мәсьәлә.

# Был-һинең

# Яҙмышы ла беҙҙең ҡулда...

## Ваҡыт ҡыҫа

2008 йылдың 1 ғинуарына тиклем ер бүлеп бирелергә тейеш. Ерҙе бушлай алыу хоҡуғы менән ҡулланмағандар бөтөнләй ерһеҙ ҡаласаҡ һәм хөкүмәт уны кемгә теләй, шуға һата башлаясаҡ. Башҡортостан ерҙәре уңдырышлы, тәрбиәле. Урындағы халыҡ эшсән. Кеҫә ҡалынайтырға теләүселәр бындай уңайлы мөмкинлекте, әлбиттә, ҡулдан ысҡындырмаясаҡ, ә урындағы халыҡ кемгәлер хеҙмәтсе булып ҡаласаҡ. Быны аңлап, халыҡ араһында аңлатыу эше алып барыусылар бөтөнләй юҡ тиерлек. Был мәсьәләнең тағы бер яғы бар: халыҡ үҙе лә ерҙе шәхси милеккә алыуҙан ҡурҡа. Беренсенән, уны һалым менән ҡурҡыталар. Уның күләмен әле бер кем дә аныҡ ҡына әйтә алмай. Айырым кешеләрҙең битараф булыуы - бер нәмә, дөйөм хужалыҡ ерҙәре лә әлегә берҙәм федераль реестрға теркәлмәгән. Хужалыҡтар тарҡалған урындарҙа ер яҙмышы бигерәк тә хәүефле. Ауыл Советтары башлыҡтары күрһәтмәне ғәҙәт буйынса һаман да юғарынан көтә. Ваҡыт ҡыҫа, әммә бер нәмә лә эшләнмәй.

## Бал ҡортона сиктәр юҡ

Рәсәй Дәүләт Думаһы сәйәсәте халыҡтың башын бутауҙан ары китмәй. Ҡасандан бирле дотацияны тулайым продукция күләменә ҡарап биреү тураһында һүҙ бара. Был закон тормошҡа ашһа, ауыл хужалығы продукцияһы етештереүсе хужалыҡтар һис тә тарҡалмаҫ, емерелмәҫ ине. Хужалыҡтар бит етештергән продукцияһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, арзан хаҡҡа тапшырырға мәжбүр. Хәҙер ер майҙанына ҡарап дотация бирә башлаһалар, кеҫә ҡалынайтыусылар тағы бер тапҡыр байып ҡаласаҡ. Мәҫәлән, ваҡытында сәнәғәт предприятиеларын банкрот

*КҮРЕП БЕЛМӘҺӘК ТӘ...*

# БЫУЫНДАН-БЫУЫНҒА

## күсер был һөйөү

Беҙҙең быуынға, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәми Ғариповты яҡындан күреп белеү, уның менән аралашыу бәхете тәтемәне. Әммә шағирҙың беҙҙең ижадҡа йоғонтоһо ҙур булды. Башҡорт дәүләт университетында белем алғанда юғарыраҡ курс студенттары Ғәбиҙулла Зарипов, Рәмил Ҡол-Дәүләт, Рәйес Түләков ағайҙар Рәми Ғарипов ижадына бик иғтибарлы булды. Һуңыраҡ "Шоңҡар" әҙәби берекмәһенә йөрөгән барыбыҙға ла күсте был һөйөү. Минең үҙемә бигерәк тә шағирҙың тыуған илебеҙ, туған телебеҙ тураһындағы әҫәрҙәре үтә яҡын булды.

Шуныһы ҡыҙыҡ, торараҡ уның ижадына бәйле һәр нәмә миңә уңыш килтерҙе. Беренсе курста уҡығанда "Урал йөрәге" хикәйәтен һөйләп, университет күләмендә уҙғарылған нәфис һүҙ бәйгеһендә 1-се урынды алыуым, бишенсе курста Рәми Ғарипов ижады буйынса диплом эшемде "5"легә яҡлауым...

Студент йылдарында шағирға бәйле тағы бер хәтирә гел генә иҫемдә тора. Йәмле яҙ айҙары. Көн салт аяҙ. Беҙ бер төркөм шоңҡарсылар телевидениела сығыш яһап ҡайтып киләбеҙ. Ул осорҙа Фрунзе менән Ғафури урамдары киҫешкән ерҙә "Спортлото" киоскыһы урынлашҡайны. Ҡол-Дәүләт "Минең бөгөн тыуған көнөм, бәхетемде һынап ҡарайым әле", тип лотерея һатып алды ла, 3 һум аҡса отто. Студент халҡы өсөн ул ваҡытта ярайһы уҡ сумма. Ҡыуаныстан тыуған көн табыны хәстәрләй башланыҡ. Уйын-көлкө менән матур байрам итәбеҙ, яңы шиғырҙар уҡыйбыҙ. Бер мәл Рәмил ағайҙың башына шәп идея килде. "Әйҙәгеҙ, Рәми ағайҙың ҡәберенә зыярат ҡылып ҡайтайыҡ!" тине ул.

Көн ҡыҫҡа ауышыуға ҡарамаҫтан, киттек. Бик матур урында, Ағиҙелдең ярының иң бейек яр башында урынлашҡан икән шағирыбыҙҙың ҡәбере. Барыбыҙ ҙа тынып ҡалдыҡ. Шул саҡ Ҡол-Дәүләттең бөйөк шағирҙың ҡәбер рәшәткәләрен ҡосаҡлап өнһөҙ генә илауын күреп тетрәндем. Ниңә күңеле болоҡһоно икән Рәмил ағайҙың? Рухи остазы артынан эйәреп, бик иртә генә китеп барырын тоймоланымы икән әллә?

Ошо килеүҙән һуң беҙ Рәми ағайҙың ҡәберен шефҡа алдыҡ, йәйен дә, ҡышын да килеп уның эргә-тирәһен тәрбиәләп китер булдыҡ. Бик белге килә: ошо матур традицияны хәҙерге студенттар дауам итәме икән?

**Зөлфиә ХАННАНОВА,**
**шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты.**

***✓ Беҙ меңәр йылдар буйына ошо тыуған еребеҙҙә йәшәгәнбеҙ, йәшәйәсәкбеҙ. Яңы шарттарға тиҙерәк яраҡлашып, үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе ҡайғыртып эш итергә тейешбеҙ.***

# Һәм минең ер!

хәленә еткереп, осһоҙ хаҡҡа һатып алдылар ҙа, уларҙы яңынан юғары хаҡҡа һаттылар. Ер менән дә шул уҡ хәл ҡабатланасаҡ. Халыҡ шуны аңлаһын ине: бер кем дә ситтән килеп, бында ер һөрөп йөрөмәйәсәк, беҙҙән осһоҙ хаҡҡа һатып алған ерҙе кире үҙебеҙгә унлата арттырып һатасаҡтар. Урман федераль ҡарамаҡҡа күскәс, беҙ нисек йәшәргә тейеш? Ғүмер буйы урманда йәшәгән умартасыларыбыҙ ҙа урманға инә алмай булып сыға бит. Хәйер, бал ҡортона рәсми сик юҡ. Тиҙҙән урманды "Был майҙан һеҙҙеке түгел", тип, мылтыҡ тотоп һаҡлай башлаһалар, нишләрбеҙ? Депутаттарға шуны ла еткерәһе ине: ауыл хужалығы көрсөк хәлендә булғас, ниңә уны һалым менән ыҙалатырға, хужалыҡтар ныҡлап аяғына баҫҡансы һалымды кисектереп тә була бит.

## Күрше хаҡы

Аңлайышлы булһын өсөн Свердловск өлкәһендәге бер башҡорт ауылы миҫалын килтерәм. Нижнесергинск районының Уфа-Шигири тигән ауыл халҡы 2004 йылдан бирле үҙҙәренең ерҙәре өсөн даулаша. Сәбәбе ябай: был ауыл урынлашҡан район үҙәген ҡала итеп рәсмиләштергәндәр. Ҡала ере статусы алғас, ауыл хужалығы ере булып һаналған майҙан бүлеп бирелә торған өлөшкә инмәй. Бөгөн ул ауыл халҡының көтөүлеге лә, сабынлығы ла, иген сәсерҙәй баҫыуы ла юҡ. Беҙҙең дә шул хәлгә ҡалыуыбыҙ ихтимал, тигән хәүеф тыуа. Әлбиттә, Президентыбыҙ, республика Хөкүмәте ундай хәлгә алып барып еткермәҫ, тигән өмөт кенә күңелде йылыта. Әммә Рәсәй кимәлендә иртәгә ни булырын бер ҙә тоҫмаллап булмай.

## Урман шаулап үҫә...

Бөгөн тырышып-тырмашып, тиҙ арала ерҙе рәсмиләштереү күҙәтелә. Мәҫәлән, юғары уҡыу йорттары башта республика ҡарамағында ине. Ул ваҡытта бюджеттан аҡса ла етерлек кимәлдә бүленә торғайны. Яйлап улар федераль статус алды. Быны "дипломдар федераль кимәлдә бирелергә, уҡыу йорттарының Рәсәй сертификаты булырға тейеш", тип аңлаттылар. Ҡыҫҡаһы, сәбәптәр табылды, ҡаршылыҡтар ҙа булманы, ғәҙәти хәл кеүек ҡабул ителде. Был бик оҫта эшләнде. Эйе, аҡса федераль бюджеттан күсә. Асылда, республика бюджетының үҙәккә ебәрелгән 70 процент өлөшөнән урап ҡайта бит ул аҡса. Сәнәғәт предприятиелары менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана. Рәсмиләштереү өсөн төрлө ысулдар, яңы хоҡуҡтар табылып ҡына тора. Мәҫәлән, акционерҙар йәмғиәттәре ерҙе рәсмиләштерергә тейеш түгел, ул ҡуртымға бирелә. Соҡона башлаһаң, бындай хилафлыҡтар бик күп. Мәҫәлән, леспромхоздар менән булған хәл бер ниндәй логикаға һыймай: урмандарҙы федераль ҡарамаҡҡа күсерҙеләр, ә леспромхоздар республика ҡарамағында ҡалды. Был балта тотоп, урман ситендә ҡарап тороу һымаҡ килеп сыға. Һәр төп ағас өсөн Мәскәүгә рөхсәт һорап йүгерергә тура киләсәк.

## Ҡуласа

Әлбиттә, халыҡтың үҙенең битарафлығы ла хафаға һала. Ерҙән ситкә китеп, миҫал өсөн автомобилселәрҙең хәлен ҡарайыҡ. Ярҙамсы ролендә булырға тейеш ЮХДИ, мәҫәлән, бахыр автомобиль хужалары менән ни генә ҡыландырмай. Улар, йыртҡыс балыҡ кеүек, ҡыуаҡ артына боҫоп, ғәйеплелерҙе тотоп, килем артынан ҡыуа. Страховкалауҙы көсләп таҡтылар, машина йөрөтөү өсөн танытмаларҙы, номерҙарҙы алмаштырҙылар. Балалар өсөн арҡы ултырғыста махсус һаҡланыу саралары булырға тейеш. Һанай китһәң, яңынан-яңы аҡса "йыуыу" ысулдарын уйлап табып ҡына торалар. Юл хәүефһеҙлеге һағында тороусылар бөтөнләй маҡсатҡа ярашһыҙ эштәр менән шөғөлләнә. Шуның кеүек, уйлап табылған яһаҡтарҙың иге-сиге юҡ. Бөгөн эш хаҡының күп өлөшө һалым түләүгә китә. Коммуналь хужалыҡтар халыҡтан зар илатып ҙур күләмдә аҡса түләтә, хеҙмәтләндереү сифаты, киреһенсә, түбәнәйә бара. Ошондай баҫым аҫтында йәшәгән халыҡ, әлбиттә, бөтөн нәмәгә битараф. Яңы ҡабул ителгән закондарҙы ул уҡымай ҙа, өйрәнмәй ҙә. Закондар үҙҙәре лә бик ҡатмарлы тел менән яҙыла - хатта юристарҙың башы етмәй. Сәйәсәт иһә сәйәсмәндәр өсөн уйын яланына әйләнде. Телевидение аша күрһәтелгән төрлө еңел-елпе шоуҙар, криминал хәлдәр, атыш-үлтереш халыҡтың башын күптән томаланы, әммә тормошта буталсыҡлыҡ юҡ, ҡайҙалыр китеп барабыҙ. Тимәк, бөтәһе лә алдан уйланып, сәйәсмәндәр аша, радио-телевидение, башҡа матбуғат саралары аша бик оҫта идара ителә. Шулай булғас, беҙҙең менән кем идара итә, тигән һорау тыуа. Уйланырға, шикләнергә, һорарға ваҡытыбыҙ юҡ - зиһенебеҙҙе ығы-зығы, битарафлыҡ, нәҫ баҫҡан. Әле американса, европаса фекерләү, йәшәү хуплана. Һуң, Рәсәй, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, ғүмер буйы үҙ юлы менән барған. Ниңә беҙ тәбиғи үҫеш юлынан ситләшеп, башҡаларҙы ҡабатларға тейеш? Минеңсә, ошо үҙенсәлекте беҙҙең депутаттар боҙорға тырыша. Боҙғандан һуң кире тәүторошҡа ҡайтырға тура киләсәк һәм яңынан үҫеш дауам итәсәк - ҡуласаның өйөрөлөүе бер ваҡытта ла туҡтамаясаҡ.

## Уртаҡ фекер уртала тыуа

Ер тураһындағы законды тормошҡа ашырырға тейешле башҡарма власть органдары, йәмәғәт ойошмалары, ауыл хужалығы белгестәрен әҙерләүсе уҡыу йорттары, ауыл хужалығы белгестәре, яҙыусылар, журналистар, юристар һәм башҡалар мәсьәләнең айышын төшөнөп, аңлатыу эше алып барырға тейеш тә бит, әммә ләммим: өндәшкән, сығыш яһаған, ер тураһында ҡайғыртҡандар юҡ кимәлендә. Үткән аҙнала Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойошторған "түңәрәк өҫтәл"дең маҡсаты ошо мәсьәләләрҙе ҡап уртаға һалып һөйләшеүгә йүнәлтелгәйне. Унда төрлө министрлыҡтар, ведомство вәкилдәре, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, ғалимдар, журналистар саҡырылғайны. Һөйләшеү барышында юғарыла әйтелгән төп өс мәсьәлә ҡаралды. Райондарҙа үткәреләсәк ҡоролтайҙарҙа ла ер мәсьәләһе мотлаҡ күтәреләсәк. Башҡарма комитет исеменән белгестәр менән бергә райондарҙа аңлатыу эштәре алып барасаҡбыҙ. Халыҡтың күҙен асырға кәрәк. Матбуғат саралары был эштә беҙгә ҙур таяныс булыр, тип ышанабыҙ. Бигерәк тә район гәзиттәре, урындағы төп мәғлүмәт сығанағы булараҡ, әүҙемлеген арттырырға тейеш. "Түңәрәк өҫтәл"дә ҡабул ителгән резолюция урындағы ҡоролтай рәйестәренә йүнәлеш бирер, тип уйлайбыҙ. Район Советы депутаттарының тәүге сессияһына урындағы ҡоролтай рәйестәре әҙерлекле килергә тейеш. Был турала район башлыҡтарына, район Советы депутаттары рәйестәренә алдан хәбәр итәсәкбеҙ.

## Башҡорт - тәбиғәт балаһы

Беҙ меңәр йылдар буйына ошо тыуған еребеҙҙә йәшәгәнбеҙ, йәшәйәсәкбеҙ. Нисек теләйбеҙ, шулай йәшәргә тейешбеҙ - башҡалар шулай теләгәне өсөн түгел. Яңы шарттарға тиҙерәк яраҡлашып, үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе ҡайғыртып эш итергә тейешбеҙ. Гел генә башҡалар "һайт" тигәнгә, "тайт" тип йәшәр заман үтте. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, республика йәшәргә, алға барырға тейеш. Бер төптән ныҡ торһаҡ, бөтөн мәсьәләләр ҙә ыңғай хәл ителәсәк. Башҡорттарҙың үҙ ерендә аҫаба булыуын бөтәһе лә белә, әммә күрмәмешкә һалыша. Оноторға теләгәндәргә быны һәр ваҡыт иҫенә төшөрөп торорға кәрәк. Башҡорт халҡы борон-борондан тыуған еренә һөйөү тойғоһо менән йәшәгән. Ул - уның ере, берҙән-бер таянысы. Ер һатып, ошоға тиклем берәү ҙә байымаған. Урман-яландарҙың, йылға-күл буйҙарының, көтөүлектәрҙең айырым кешенеке булыуы беҙҙең аңға һыймай, сөнки ул бөтөн халыҡтыҡы, дөйөм милек. Бушҡамы ни, Лев Толстой: "Яҙ булһа башҡорттар һыбай менеп, тыуған ерҙәрен урап сыға. Улар шул хәтлем дә тәбиғәт балалары", - тип, һоҡланып яҙып ҡалдырған. Башҡорт үҙгәрмәгән, ул бөгөн дә шулай: Тыуған илгә һөйөү тәбиғәт аша дөйөм милек булып ҡаныбыҙға һеңгән. Ҡала йәшәгән башҡорттар ҙа шул уҡ тәбиғәт балаһы булыуҙан туҡтамаған. Ерҙе бүлгәндә башҡорттарҙың ана шул үҙенсәлеген һис тә иҫтән сығарырға ярамай.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**

**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Тарих ҡабатлана, тиҙәр. Дөрөҫтөр. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгән мәлдә "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен яйға һалыу тураһында"ғы Закон тормошҡа ашырылырға тейеш. Бынан дүрт ярым быуат элек ата-бабаларыбыҙ Рәсәйгә ҡушылып, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын яҡлап алып ҡалған. Әлеге Закон да беҙгә үҙ хоҡуғыбыҙҙы файҙаланыу мөмкинлеген бирә түгелме?**

*СОБХАНАЛЛА!*

# Ҡөрьән аяттары...

## сирҙән һауыҡтыра

**Американың Флорида штаты Панама ҡалаһының "Әкбәр" клиникаһында эшләүсе Әхмәт әл Ҡаҙий исемле мосолман ғалим эске көсөргәнеш кисереү арҡаһында психикаһы ҡаҡшаған кешеләргә, йөрәк өйәнәге һәм башҡа ауырыуҙар менән яфаланыусыларға Ҡөрьән аяттарын көйләп уҡыуҙың шифалы йоғонтоһо буйынса махсус тикшеренеүҙәр үткәргән.**

Тикшеренеүҙәр өсөн ғалим Ҡөрьән һәм ғәрәп теле тураһында бер нимә лә белмәгән ауырыуҙарҙы һайлап ала. Уларға тәүҙә Ҡөрьәндең ғәрәпсә тексын уҡыйҙар ҙа, һуңынан йөкмәткеһе ниҙән ғибәрәт булыуын инглизсә аңлаталар. Ҡөрьән аяттарының ауырыуҙарға тәьҫирен иң камил заманса приборҙар һәм компьютерҙар теркәп бара. Бер йыл буйы үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен ғалим 1984 йылдың августында Төньяҡ Америка медицина конгресында уҡып ишеттерә. Һөҙөмтә шаҡ ҡатырғыс була. Ҡөрьән аяттарын тыңлаған психик ауырыуҙарҙың 97 проценты һауыға. Аяттарҙы тыңлағанда уларҙың организмында барған үҙгәрештәрҙе махсус приборҙар теркәй. Унда, аяттарҙы тыңлаусы ауырыуҙарҙың йөрәк эшмәкәрлеге, температураһы, хатта тән тиреһененең дә яҡшырыуы теркәлгән. Конгреста тәҡдим ителгән был материалдар медицина ғалимдарында, йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт сараларында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Бер аҙҙан Нидерландта йәшәүсе психолог профессор Ван дер Ховен да Ҡөрьәндең шифалы тәьҫирен раҫлай. Иң ҡыҙығы, Ван дер Ховен үҙе мосолман түгел, ул Ҡөрьән һәм Ислам дине менән фәнни күҙлектән сығып ҡына ҡыҙыҡһына. Ул "Алла" һүҙен ҡабатлауҙың һәм Ҡөрьәнде уҡыуҙың һаулыҡҡа файҙалы булыуын үҙ тәжрибәһенән сығып, йәғни өс йыл буйы ҙур төркөм пациенттарына үткәргән тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһе менән иҫбатлай. Ул да мосолман булмаған һәм ғәрәп телен белмәгән ауырыуҙарҙы дауалағас, уларға "Алла" һүҙен ғәрәп теле фонетикаһы нормаларына ярашлы дөрөҫ итеп әйтергә өйрәтә. Һөҙөмтәлә нервылар көсөргәнешлегенән психик ауырыуға дусар булған, ҡайғы-хәсрәттән арына алмай, тормоштан төңөлгән һәм башҡа ауырыуҙарға һабышҡан сирлеләр шап-шаҡтай булып һауыға.

"Әл Ватан" һәм "Катари әр-райя" гәзиттәрендә был психологтың: "Ҡөрьәнде даими уҡыған, ғәрәп теленең яңғырашын дөрөҫ әйтергә һәләтле мосолмандар "Алла" һүҙен ҡабатлауҙан ғына ла ҙур дәрәжәлә төрлө нервылар ауырыуҙарынан, психикаһы ҡаҡшауҙан һаҡлана", тигән һүҙҙәрен яҙып сыға. Психологтың раҫлауынса, хатта "Аллаһ" тигән һүҙҙәге һәр хәреф психикаһы ҡаҡшап, аҡылына зәғиф килгән кешеләрҙе һауыҡтырыуҙа мөһим роль уйнай икән. Мәҫәлән, профессор, "Аллаһ" һүҙендәге яңғырауыҡлы тәүге "Әлиф" өнө һулыш алыуҙы контролдә тота һәм тын юлы эшмәкәрлеген көйләй; ғәрәпсә яңғыраш алған "л" хәрефе иһә һулыш сығыуын еңеләйтә, ә һуңғы "h" хәрефе йөрәк менән үпкә бәйләнешен яҡшыртып, йөрәк ҡағышын контролдә тота, ти.

Бөйөк шәйехтәрҙең дә, ғәрәп телендәге һәр хәрефтең йәшәйештең юғары нөктәһе менән фани донъя араһында айырым бәйләнеше бар, тиеүе билдәле.

"Алла" һүҙен әйткән һайын Бөйөк илаһты иҫкә төшөргәндәй, зиһененең яҡтырыуын тоймайһыңмы ни? Был тойғонан кешенең булмышы бөтөн тереклекте булдырыусы һәм барса тереклек өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе бөйөк Илаһтың, кешегә йән биргәндә уның йәненә, тәненә һәм аҡылына ғәжәйеп нескә булып үрелгән Алла васыяттары ғилемен тыумыштан белеп, улар артынан барырға ынтылырға кәрәклеге хаҡындағы мәғлүмәтен һеңдереп ала.

Дөйөм алғанда, ғәрәп һүҙҙәрендәге теләһә ҡайһы яңғырауыҡлы өндәр билдәле бер йүнәлештә таралып китерлек тирбәлеүгә һәләтле. Ул оҙайлы ғына яңғырап китеү һәләтенә һәм кешегә бөтөн яҡтан тәьҫир итеү көсөнә эйә булыуы менән ғалимдарҙы таң ҡалдыра.

Мәҫәлән, "әйн" йәки "ғәйн" тигән өндәр рус һәм башҡа бик күп телдәрҙә осрамай. Тимәк, ғәрәпсә дөрөҫ итеп әйтә белгәндә генә был өндәрҙең тәьҫир итеүенә өлгәшергә мөмкин. Шулай уҡ Ҡөрьән аяттарындағы һәм зикр һүҙҙәрендәге яңғырауыҡлы һәм тартынҡы өндәрҙе дөрөҫ итеп әйткәндә, улар үҙҙәрендәге Илаһтың атрибуттары тураһындағы мәғлүмәтте аят уҡыусының бөтөн тәненә таратып ебәрә.

Бәлки Ҡөрьәндең бөйөклөгөнөң һәм үҙенә ылыҡтырғыс көсөнөң сере лә шундалыр.

Сүрәләрҙе көйләп уҡыу ҙа ҡаҡшаған нервылар системаһын һауыҡтырыуҙа ыңғай йоғонто яһай. Шулай итеп, бөгөн Ҡөрьән ярҙамында йөрәк өйәнәгенән башҡа тағы бик күп ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкин булыуы бөтөн донъяла билдәлелек алды.

*✓Мин ҡайһы саҡта шулай ҙа уйлап ҡуям: Рәмиҙе ҡыҫыу, яҙғандарын баҫып сығарыуҙы тыйыу уны ижадка сәмләндереүсе фактор ҙа булғандыр, бәлки. Бөгөн бына бар яҡтан да ирек бар, әммә ҡыйыу әҫәрҙәр юҡ.*



**▶Рәми Ғарипов менән тәүге тапҡыр ҡасан, ҡайҙа осрашып таныштығыҙ? Ул осрашыу күңелегеҙҙә ниндәй хәтирәләр ҡалдырҙы?**

# ЙӨРӘГЕНДӘ ХАЛҠЫ

## кеше булырға ла хаҡы юҡ...

**"Шағирҙар, ғөмүмән, еңел яҙмышлы булмай. Уйлап ҡараһаң, ысынында бит улар фажиғәле, трагик яҙмышлы шәхестәр. Шағир һәр ваҡыт үҙ замана менән бәхәсләшеп, кеше күңеленә, тормоштоң именлегенә янаусы ҡурҡыныстарҙы алдан зирәк күреп йәшәй. Шуға ла ул һәр саҡ һыҙлана, шуға ла ул тыныс яҙмышлы, ғәҙәттәгесә бәхетле була алмай...**

**Рәми Ғарипов аманатына тоғро булыу - үҙ-үҙебеҙгә талапсан булыу, берҙәм булыу, халыҡҡа тоғро булыу, ғәҙел булыу ул" тигәйне Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев 1989 йылда "Аҡ тирмә"ләге аманат кисәһендә.**

**Быйыл Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 75 йыл тулған йылда уның хаҡындағы аманат булырлыҡ һүҙҙәр һаман да әйтелә. Үҙҙәре "Рәми ағай беҙҙең остазыбыҙ" тип йөрөлгән күренекле шағирҙар, икеһе лә Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаттары: шулай уҡ Зәйнәб Биишева, Сергей Чекмарев, Фәтих Кәрим исемендәге әҙәби премиялар лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ менән Г.Х. Андерсен исемендәге Халыҡ-ара Маҡтаулы дипломға эйә булыусы, Ғ. Сәләм исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Сафуан ӘЛИБАЙ шағирҙы иҫкә ала.**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Беҙ Сафуан менән 1961 йылда Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингәндә баш ҡала Рәми Ғариповтың таланты, тормошо, батырлығы тураһында легендалар менән тулғайны. Рәми ағай үҙе был ваҡытта Салауат районының "Һарғамыш" совхозында комсомол ойошмаһы секретары булып эшләп йөрөй ине. 1964 йылдың көҙөндә Министрҙар Советының ҙур залында ҙур шиғыр байрамы булды. Рәми ағайҙың был ваҡытҡа тап Салауат районында эшләгән саҡта яҙған шиғырҙары тупланған "Һабантурғай йырҙары" тигән китабы сыҡҡайны. Беҙ, студенттар, ошо кисәгә космонавты күрергә килгән кеүек, Рәми Ғариповты күрергә тип килдек. Шунда Рәми ағайҙы үҙ күҙебеҙ менән тәүге тапҡыр күрҙек. Ул кисәгә ҡанатланып килгәйне, кисәлә сығыш яһаусы шағирҙар менән бергә президиумда ултырҙы, унан күҙебеҙҙе алманыҡ. Аҙаҡтан шағир Өфөгә күсеп килгәс, уның менән бик күп тапҡырҙар, төрлө мәлдәрҙә, төрлө хәлдәрҙә осраша торҙоҡ. Уның менән осрашыу, аралашыу һәр саҡ ниндәйҙер бәхәскә, фекер алышыуға ҡорола торғайны. Һәр ваҡыт унан яңы һүҙҙәр, яңы фекерҙәр, хатта яңы терминдар, әле беҙ уҡып белмәгән шағирҙар, рәссамдар, философтар хаҡында ишетеп була ине. Бар донъяға билдәле шәхестәр хаҡында ла иң тәүҙә уның аша белә инек. Ул беҙҙең өсөн "аяҡлы энциклопедия" булды. Рәми ағай әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, сәнғәткә һәм беҙгә лә донъя фекере бейеклеге кимәленән сығып талап ҡуйҙы. Уның "Рәми Салаватски" тигән псевдонимы булды. Үҙ-үҙенә ныҡ ышанды, шуға күрә лә, бер нәмәнән дә ҡурҡмай, хәҡиҡәтте ҡыйыу рәүештә тура әйтеүсе батыр ҙа ине ул. Нишләп ул ҡурҡмай икән, ҡайҙан көс таба, тип беҙ аптырай инек үҙенә. Вәлиди кеүек шәхестәрҙең исемен кешеләр шып-шым ғына һөйләргә лә ҡурҡҡан заманда ул беҙ 90-сы йылдарҙа ғына телгә алған тарихи хәҡиҡәт хаҡында һөйләй ине инде. Шуға күрә беҙ уның менән осрашыуҙы һәр ваҡыт көтөп ала торғайныҡ.

**С. ӘЛИБАЙ:** Мин иң беренсе Рәми ағайҙың яҡташы булыуым менән ғорурланам. Унынсы класты тамамлағас, күрше ауылда комсомол секретары булып эшләнем. Район комсомол конференцияһына барғанда Рәми ағай менән тәүге тапҡыр осрашып таныштыҡ. Ул трибунаға сығып, 24 ауылды берләштергән "Һарғамыш" совхозы исеменән сығыш яһаны. Уның сығышы ошо ауылдарҙа йәшәүселәрҙең бөгөнгөһөн һәм киләсәген хәстәрләүгә ҡоролғайны.

Артабан мин университетҡа уҡырға килгәс тә Рәми ағай менән айырылманыҡ. Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин, Әнғәм Атнабаев, Марат Кәримов менән һәр ваҡыт ныҡ аралашып йәшәнек. Рәми ағай беҙҙе бигерәк яҡын күрҙе, һәр беребеҙгә өмөт бағланы һәм әҙәбиәткә алмаш быуын тәрбиәләү менән туранан-тура шөғөлләнде. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләп йөрөгәндә мине саҡырып алып, теге йәки был сара хаҡында гәзиткә мәҡәлә яҙырға ҡуша торғайны. Бер юлы әҙәби ижадка ла дәртләндерә белде.



***У**ның барыбыҙға ла өлгө булырлыҡ шәхесе хаҡында ҡабат-ҡабат әйтке килә. Ул бер ниндәй хәйләһеҙ, саф һәм керһеҙ күңелле булды. Милләт, рух өсөн барлыҡ көсөн, ҡеүәтен биреп янған башҡа кешене мин белмәйем. "Мин Рәми менән дуҫ булдым", тип әйтеп йөрөүселәр күп хәҙер. Пушкин, Бабич менән дә бер осорҙа йәшәгән кешеләр булған, ләкин улар Пушкин да, Бабич та була алмаған. Уның менән бер осорҙа йәшәү бик ҙур бәхет, әммә үҙе менән дуҫ булыу өсөн уның үҙе кеүек юғары рухлы булыу зарур ине. Беҙ барыбыҙ ҙа уның шәкерттәре генә булдыҡ.*

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Ул әҙәбиәттең төп ҡоралы булған телде бик тәрән тойған шағир ине. Беҙ Әнғәм Атнабаев, тиһәк, ул: "Әнғәм Аҙнабаев", тип, беҙҙе төҙәтә һәм шулай яҙа ла торғайны. Беҙҙең "Совет Башҡортостаны" гәзитенә йыш ҡына партия Өлкә комитеты тарафынан баш мөхәррир урынбаҫарҙары тәғәйенләнә ине. Уларҙың ҡайһы берҙәре хатта үҙҙәренең фамилияларын да башҡортса яҙа белмәне. Беҙ, әҙәбиәт бүлегендә эшләүсе Рәми Ғарипов, Рәшит Шәкүр һәм мин, баш мөхәррир юҡ саҡта гәзитте үҙ фамилияһы менән "Кундузбаев" тип сығарыусы урынбаҫарҙың ҡултамғаһын, бүлмәһенән сығыуы була, йүгереп барып, "Ҡондоҙбаев"ҡа төҙәтә инек. "Ахунзянов"ты ла "Ахунйәнов"ҡа төҙәтә ине Рәми ағай. Ул, артын-алдын ҡарап тормай, һәр саҡ дөрөҫ булған фекерҙе үткәрергә тырышты, хаталарҙы төҙәтте. Шелтәнән дә, башҡанан да ҡурҡманы. Милләттең төп билдәләренең береһе булған туған телебеҙҙең саflығы өсөн һәр саҡ көрәшеп йәшәне. Әммә партия органдары етәкселәре, юғары даирә әһелдәре Рәмигә "милләтсе" тигән исем таҡты. Рәми Ғарипов, ул саҡтағы термин менән әйткәндә, иң интернациональ шәхестәрҙең береһе ине. Уның яҡын күргән кешеләре, дуҫтары ла төрлө милләт вәкилдәре: Хәсән Туфан, Михаил Дудин, Степан Злобин, Рәсүл Ғамзатов, Давид Күгелтинов, һ.б. Шағир, яҙыусы барыбер ҙә яҡшы мәғәнәлә "милләтсе" булырға тейеш. Ул әгәр ҙә шулай булмаһа, үҙ маҡсатына өлгәшә алмай. Донъя әҙәбиәтенең һәм мәҙәниәтенең иң күркәм өлгөләрен өйрәнеүе һәм уларҙы башҡортсаға тәржемә итеүе уның ошондай булмышынан килде.

**▶Тәбиғәт йыш ҡына кешегә талант, һәләт бирә лә, уны шәхес булыуҙан мәхрүм итә. Рәми Ғариповты күреп белеүселәр йыш ҡына уны шәхес булараҡ та, кешелекле сифаттары буйынса ла иҫкә ала.**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Уның барыбыҙға ла өлгө булырлыҡ шәхесе хаҡында ҡабат-ҡабат әйтке килә. Ул бер ниндәй хәйләһеҙ, саф һәм керһеҙ күңелле булды. Милләт, рух өсөн барлыҡ көсөн, ҡеүәтен биреп янған башҡа кешене мин белмәйем. "Мин Рәми менән дуҫ булдым", тип әйтеп йөрөүселәр күп хәҙер. Пушкин, Бабич менән дә бер осорҙа йәшәгән кешеләр булған, ләкин улар Пушкин да, Бабич та була алмаған. Уның менән бер осорҙа йәшәү бик ҙур бәхет, әммә үҙе менән дуҫ булыу өсөн уның үҙе кеүек юғары рухлы булыу зарур ине. Беҙ барыбыҙ ҙа уның шәкерттәре генә булдыҡ. Халҡыбыҙ күңелендә "Рәми мәктәбе" бар, ул беҙҙең күҙебеҙҙе асып китте, азатлыҡҡа, батырлыҡҡа әйҙәне. Ул бер кемгә лә оҡшарға тырышманы, ярамһаҡланманы, үҙен түгел, халыҡтың үҙен күрһәтеү өсөн көрәшкән шағирҙарҙың иң сағыуы. Бөгөн "Халҡым" тип әйткән һәм яҙған кешеләрҙе беләбеҙ, әммә шулай тип әйткән кешеләрҙең ҡайһыларының бер кешене лә яратмағанын беләбеҙ. Хатта әсәһен, атаһын яратмаған кешеләрҙең дә "Халҡым" тип яҙырға хоҡуғы юҡ. Ошо йәһәттән Рәми ағайҙың рухи һыны бик ҙур. Ул беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән Кеше ине.



**1967 йылда йәш яҙыусылар конференцияһынан һүң, беренсе рәттә уртала – Рәми Ғарипов.**
**А. Виноградов фотоһы.**

*✓ Рәми ағай XX быуатта үҙендә Салауат рухын тергеҙеп, башҡаларҙы уятып, шиғриәт өсөн генә түгел, ғөмүмән, халыҡ тормошо өсөн ваҡиғаға, төшөнсәгә әүерелә алыусы шәхес, шағир.*



# БУЛМАҒАНДЫҢ,

**С. ӘЛИБАЙ:** Рәми ағайҙың ғаиләһе менән беҙҙең ғаилә аралашып йәшәнек. Ҡасан осрашһаҡ та, Рәми ағайҙың ҡуйынында дәфтәре була торғайны. Беҙҙән үҙе өсөн яңы булған бер һүҙ ишетһә, шул һүҙҙе дәфтәренә яҙып, мәғәнәһен дә һорашып, теркәп ҡуйыр ине. Ҡатыным Фәрҙиә менән ҡәйнәм йырлаһа, уларҙың йырын рәхәтләнеп тыңлар булды.

Затон яғына киткән күпергә яҡын Ағиҙелдә бер утрау бар. Бер йәй көнө шунда ял итергә төштөк. Һыу инеп алғас, Рәми ағай: "Әйҙәгеҙ, егеттәр, ергә ятып үлән үҫкәнен тыңлап алайыҡ әле", - тигән тәҡдим индерҙе. Үләнде тапап йүгереп йөрөгәнебеҙ бар, әммә уның үҫкәнен тыңлаған юҡ ине әле. Ятып тыңланыҡ. Ысынлап та, үлән ҡыуарған япраҡтарҙы шыптырлатып тиртеп ҡалҡып сыға икән. Үлән үҫкән тауышты иң беренсе Рәми ағай ярҙамында ишеттек.

Рәми Ғарипов әҙәбиәтебеҙҙәге Ғәлимов Сәләм, Рәшит Ниғмәти кеүек һүҙ оҫталарының риторикаһынан һуң, башҡорт шиғриәтен тәүгеләрҙән булып фәлсәфәүи лирика йүнәлешенә борған шағир.

**▶ Рәми Ғарипов халҡыбыҙҙың киләсәгенә ҙур өмөт менән ҡараған һәм ҡайһы бер шиғырҙарында был өмөт асыҡ сағыла. Әммә уның 45 йәшендә, туплар аҡылды туплап, инде тулы ҡанлы ижад йәшендә арабыҙҙан китеп барыуы үкенесле. Уның менән һуңғы тапҡыр күрешеүегеҙ нисек булды? Милләтебеҙ тел һәм рухи үҫеш йәһәтенән яңы һынылыш алған, үҙебеҙ 90-сы йылдарҙың киң билдәлелеге тип атаған йылдар уның хыялында бар инеме?**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Мин, мәҫәлән, үҙемде уны яҙыусылар араһынан иң һуңғы тапҡыр күреп, оҙаҡ итеп һөйләшкән кешеләрҙең береһе тип иҫәпләйем. Мин ул саҡта "Совет Башҡортостаны" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләгәндә Сибайҙа йәшәй инем. Төнгө ун икенсе яртыла миңә Баймаҡтан шылтыраттылар: Рәми ағай Урта Азиянан ҡайтышлай, Баймаҡтағы таныштарына һуғылған да, минең тиҙ генә килеп етеүемде һораған. Төндә машина таба алманым, Баймаҡҡа иртәнге һигеҙгә генә барып еттем. Берәр хәл булдымы икән, тип ҡурҡыңҡырап барғайным, баҡтиһәң, Рәми ағайым туҡталған фатир иҙәнендә картуф әрсеп ултыра. Уның йылмайыуын күргәс, эскә йылы инде. Ул Урта Азияла йөрөп, бик ҡанатланып ҡайтҡайны. Күңеле иҫ киткес күтәренке ине. Күп итеп китаптар тейәп алғайны. Бик оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Һәр саҡтағыса, тормош ваҡлыҡтарына зарланманы, күршеләрҙәге әҙәбиәткә, халыҡтың рухының иркенлегенә һоҡланды, бер аҙ көнләшеүен дә йәшермәне. Был хәлдең беҙҙә лә мөмкин булыуын иҫенә төшөрҙө. Әлеге һүҙ азатлығы хаҡында хыялланыуын да йәшермәне. Ундай көндәрҙең киләсәген тоя ине, әммә ул көндәрҙең ҡасан килерен тоҫмаллай алмай ине. Мин ҡайһы саҡта шулай ҙа уйлап ҡуям: Рәмиҙе ҡыҫыу, яҙғандарын баҫып сығарыуҙы тыйыу уны ижадҡа сәмләндереүсе фактор ҙа булғандыр, бәлки.

Бөгөн бына бар яҡтан да ирек бар, әммә ҡыйыу әҫәрҙәр юҡ. Оҙаҡ ваҡыт ситлектә торған филде күргәнегеҙ бармы? Уны әгәр ҙә ситлегенән ҡыуып сығарһаң, йөрөй-йөрөй ҙә, кире ситлегенә инеп тора. Ә инде ситлектәге филде ҡыҫа башлаһаң, ул нисек тә ситлектән ҡасып, йә рәшәткәһен ватып сығырға ынтыла. Шуның кеүек инде. Элекке ҡатып ҡалған догмаларҙан ҡотола алмауыбыҙ ҙа ошонан киләлер, тип уйлайым. Бөгөн беҙ Рәми ағайҙың исеменә таянабыҙ, бөгөн иҫән булһа, беҙ уның үҙенә таяныр инек. Рәми Ғарипов һәр саҡ үҙен башҡаларға ҡарап, сәмләндерә белгән, тоҡандыра алған. Муса Йәлилдең дә иң яҡшы шиғырҙары палач балтаһы аҫтында яҙылған, Рәми Ғариповтың иң бөйөк әҫәрҙәре уның иң ауыр ваҡыттарында ижад ителгән. Ниндәйҙер бер әҙиптең "Шағир иң кәмендә бер-ике йыл төрмәлә ултырып сығырға тейеш", тип әйткәне лә бар. Әлбиттә, унда ултырырға Хоҙай ҡушмаһын, әммә төрмәлә ултырған кешенең кисерештәрен унда ултырмайынса яҙып булмай. Беҙҙең әҙәбиәттә уйлап сығарылған әҫәрҙәр бик күп, ләкин улар ысынбарлыҡтан бик алыҫ тора. Бабич та иркен, рәхәт тормошта йәшәһә, анауындай шиғырҙарын, бәлки, яҙа ла алмаған булыр ине.

**С. ӘЛИБАЙ:** Уны шулай көтмәгәндә донъянан китер, тип бер кем дә уйламаны, әлбиттә. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ул Батырша яҙмышы менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынды. Уның тормошона бәйле бик күп мәғлүмәттәр, китаптар тупланы. Ошо маҡсатта ҡайҙандыр "Батша төрмәһе тарихы" тигән рус телендәге китап тапҡан. Ул китабы әле лә ғаилә архивында һаҡлана. Әҙерлегенә ҡарағанда, ул Батырша хаҡында ҙур бер әҫәр яҙмаҡсы ине. Ҡайһы бер әҫәрҙәрен яҙып та өлгөрҙө. "Батырша" шиғырын иҫләйһегеҙҙер.

Донъялыҡтан китеренән алда Рәми ағай тәржемә менән шөғөлләнде. "Минең шиғырҙарым киләсәктә, бәлки, үлеп бөтөр, бына минең тәржемәлә Ғүмәр Хәйәмде уҡырһығыҙ", тип әйткәне иҫемдә. Тәржемәгә тотоноуының икенсе бер сәбәбе лә бар ине. Үҙенең шиғырҙары баҫылмағанға күрә лә, нисек тә ижадтан айырылмаҫҡа теләүе, көн итергә ынтылыуы күренә бында. Уның тәржемә өҫтөндә нисек эшләүен күреп ғәжәпләнә инем. Бүлмәһендәге епкә кер эләктергестәр менән бер шағирҙың шиғырының төрлө телдәрҙәге төрлө варианттарын теҙеп элеп, уларға һан ҡуйып, янына үҙенең башҡортсаға ауҙармаһын элеп ҡуйыр ине. Үҙе мәрхүм булғас, уның бер-бер артлы китаптары донъя күреп, аҙаҡтан өс томлығы баҫылды. Уға тиклем шағирҙың ижады башлыса ҡуйын дәфтәрҙәрендә, блокноттарында, көндәлектәрендә йәшәне. Әлбиттә, һүҙ азатлығы өҫтөнлөк иткән замандың килерен ул тоя ине, әммә тиҙ арала китаптары донъя күрер, ижады Салауат Юлаев премияһы, халыҡ шағиры исеме менән баһаланыр, үҙе уҡыған интернат-мәктәпкә исеме бирелер тип ул күҙ алдына ла килтерә алмағандыр, тип уйлайым. Мин "Башҡортостан пионере"гәзитендә эшләгән саҡта корректура уҡып ултырһам, Рәми ағай килеп инде лә: "Сафуан, етәр, ҡуй шул гәзитеңде, нисә һан гәзит сығарҙы, тип иҫләмәҫтәр, ниндәй әҫәр яҙып ҡалдырҙы, тип әйтерҙәр", тип әйтер ине уйынлы-ысынлы итеп.

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Рәми Ғарипов бөгөнгө шағир ғына түгел, ул - үткәнге лә, бөгөнгө лә, киләсәкке лә шағир. Бөгөн уның рус теленә тәржемә ителгән әҫәрҙәре юҡ дәрәжәһендә. Тәржемә өлгөләре бар, әлбиттә, әммә тотош ижадын руссаға тәржемә итеү беҙҙең әҙәбиәттең алдында торған оло бурыс.

**▶ Үткән быуаттың 80 - 90-сы йылдарында беҙҙең ил йәмәғәтселегендә яңы фекерҙең уяныуын рустар Солженицын, Бродский, Ахматова исемдәре менән бәйләй. Донъялар үҙгәреүенән күпкә алда, 1964 йылда, "Табыныу" поэмаһын һәм бик күп шундай шиғырҙар яҙған Рәми Ғарипов та башҡорт йәмәғәтселеге өсөн шундай уҡ иң тәүге яңы фекер уятыусы...**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Был - юҡ ерҙән барлыҡҡа килгән фекер түгел. Бынан 450 йыл элек Иван Грозныйға барған ырыу башлыҡтарының, яуға күтәрелгән Салауаттың, ирек өсөн көрәшкән Вәлидиҙең, Бабичтарҙың хыялында ла башҡорт иленең үҙаллы йәшәү хыялы, аҫабалыҡ, үҙ ереңә үҙең хужа булыу фекере ятҡан. Рәми Ғарипов иһә тарихта уларҙың һалған оранын ишетеп, бөгөнгөгә ялғай алған шағир. Былар Рәми үҙе генә уйлап сығарған төшөнсә түгел. Ул халыҡ исеменән азатлыҡтың йәшәргә хаҡлы икәнен раҫлаусы шағир. Салауат та, Рәми ҙә бер ырыуҙан, был да осраҡлы түгел. Хатта Миңлеғәле Шайморатовтың ата-олаталары ла әйле ырыуынан.

**С. ӘЛИБАЙ:** Рәми ағай XX быуатта үҙендә Салауат рухын тергеҙеп, башҡаларҙы уятып, шиғриәт өсөн генә түгел, ғөмүмән, халыҡ тормошо өсөн ваҡиғаға, төшөнсәгә әүерелә алыусы шәхес, шағир. Бүлмәһендә элеүле торған Башҡортостандың картаһына ҡайһы ауылда, ҡайһы ерҙә, ҡасан булыуы хаҡында билдәләй торғайны.



***Затон яғына киткән күпергә яҡын Ағиҙелдә бер утрау бар. Бер йәй көнө шунда ял итергә төштөк. Һыу инеп алғас, Рәми ағай: "Әйҙәгеҙ, егеттәр, ергә ятып үлән үҫкәнен тыңлап алайыҡ әле", - тигән тәҡдим индерҙе. Үләнде тапап йүгереп йөрөгәнебеҙ бар, әммә уның үҫкәнен тыңлаған юҡ ине әле. Ятып тыңланыҡ. Ысынлап та, үлән ҡыуарған япраҡтарҙы шыптырлатып тиртеп ҡалҡып сыға икән. Үлән үҫкән тауышты иң беренсе Рәми ағай ярҙамында ишеттек.***

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Бөгөн үрмәксенән күрмәксе әҙәбиәткә килгән кешеләр күп. Яҙыусылар союзының ике йөҙҙән ашыу ағзалары араһында Рәми Ғарипов һымаҡ ҙур таланттар ҙа, әҙәбиәтте кәсеп һымаҡ итеп күргән һәүәҫкәрҙәр ҙә юҡ түгел. Ана шул һәүәҫкәрҙәр ысын таланттарҙы өнәп бөтмәй ҙә инде. Улар бер сюжет линияһын табып ала ла, мөхәббәт конфликты индерә лә, әҫәрҙән-әҫәргә геройҙарҙың исем-шәрифен үҙгәртеп, ҡыуа ла ҡыуа. Уларҙың бар әҫәрҙәре тик бер әҫәр һымаҡ ҡына ҡабул ителә. Ошо юлды уҡыһалар, ундайҙар үҙҙәрен таныйҙыр, тип уйлайым. Ундайҙарҙың бер ниндәй ҙә художестволы ҡиммәте юҡ. Ә Рәми ағай ысын мәғәнәһендәге профессиональ әҙип ине. Мәктәптә уҡыған сағында Горькийҙың 30 томын, Ғафуриҙың ижадын тотош уҡып сыға. Ундағы уңғанлыҡ, ундағы ныҡышмалылыҡ тағы ла ниндәй әҙиптәрҙә бар икән?

**▶ Әгәр ҙә Рәми Ғарипов башҡасараҡ заманда йәшәгән булһа...**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ** Уның шундай заманда йәшәүе - бәхете. Башҡа заманда йәшәгән булһа, шул тиклем камәлгә етеп асылмаҫ ине. Мәҫәлән, беҙ һуғышты ни тиклем итеп ҡәһәрләйбеҙ, әммә һуғыш донъяны ниндәй цивилизацияға, халыҡтар, илдәр һәм дәүләттәр берҙәмлегенә килтерә. Әгәр ҙә Рәми бөгөн тыуған булһа, ниндәй генә талантҡа эйә булмаһын, 45 йәшенә әле беҙ белгән Рәми булмаҫ ине ул. Шәхесте заман тыуҙыра.

**С. ӘЛИБАЙ:** Уның "Табыныу" поэмаһында шундай юлдар бар:

Әкиәттәге серле ҡурай һымаҡ,
Әйт, был ниндәй ҡанлы тантана?
Бер осоңдан һинең балың тамһа,
Бер осоңдан ниңә ҡан тама?..

Сағыштырмаса һил, тыныс булып күренгән замандың ошондай ҡапма-ҡаршылыҡлы һулышын тойғас, шағир шул заманды үҙендә йәшәткән булып сыға.

**▶ Рәми Ғарипов үҙ балаларын милли рухта тәрбиәләүгә килгәндә лә күптәргә өлгө булырлыҡ...**

**И. КИНЙӘБУЛАТОВ:** Хәҙер ялған патриоттар күбәйҙе. Үҙ өйөндә бер бөртөк балаһы башҡортса белмәгән көйөнә халыҡты башҡортса белмәүҙә ғәйепләүселәр бар хәҙер. Рәми ағай иһә, балаларына башҡорт теле буйынса дәреслек тотторop ултыртып туған телгә өйрәтмәһә лә, үҙенең туған телгә мөхәббәтле мөнәсәбәте менән ғаиләһендә туған тел мөхите тыуҙыра алғандыр, тип уйлайым. Бына минең дә балаларым береһе лә башҡорт класында уҡыманы, шулай тура килде, әммә башҡортса һөйләшәләр.

**С. ӘЛИБАЙ:** Рәми ағай үҙ халҡы, уның тарихы өсөн йәшәгән шәхес булды. Йәшәүенең төп маҡсаты ла ошо йүнәлештә булғас, уның балалары ла атаһының юлын һайланы. Ул үҙенең шәхси өлгөһө менән уларҙы ошо юлға төшөрә алыусы атай булған. Үҙенең генә балаларын түгел, хәҙер инде милләтебеҙҙең нисә быуын балалары уның "Туған тел" кеүек шиғырҙарын уҡып, үҙ халҡын һәм уның телен яратырға өйрәнә.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әсәм теле миңә - сәсән теле,-**
**Унан башҡа минең халҡым юҡ,**
**Йөрәгендә халҡы булмағандың**
**Кеше булырға ла хаҡы юҡ!**

**Был юлдарҙы Рәми Ғарипов бынан теүәл 50 йыл элек, 1957 йылда яҙған. Был шиғыр ярты быуат элек яҙылһа ла, уның мәғәнәһе йылдар үткән һайын тәрәнәйә бара. Был шағирҙың үлемһеҙлеге хаҡында һөйләй...**

# Атаһынан күргән уҡ юныр




## Тубырсыҡ

**Улым Азаматҡа**

Уйнайһың һин уйынсығың менән
Уйынсығың, улым, тубырсыҡ.
Уйнатҡаның ни ул - белмәйһең дә,
Булһын ғына һиңә уйынсыҡ!..

Йоҡлайһың да тағы уйнайһың һин,
Бар тормошоң әле уйында.
Ғүмер бирҙек һиңә, кем булырһың?
Ошо һорау сыҡмай уйымдан.

Күпме көстө һалыр кәрәк әле,
Һиңә кеше булыр өсөн дә,
Киләсәктә шаулар ҡарағай бит
Ята шул тубырсыҡ эсендә!..

*Азамат Рәми улы - рәссам. Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт мәктәбендә бергә уҡыған Әлиә исемле ҡыҙға өйләнә. Ике бала үҫтерәләр. Балалары Йәлил 20-се башҡорт мәктәбендә уҡый, ҡыҙҙары Шәүрә балалар баҡсаһына йөрөй.*

## Улым Салауатҡа

Кереш тартам, улым, уҡ атырға,
Мөлдөрәмә күҙең менән баҡ.
Әйткән һүҙҙе - атҡан уҡты, улым,
Ҡолағыңа алҡа итеп таҡ.

Яҙыҡ атмам уҡты, сәпкә тоҫҡап,
Тик ҡолаҡ һал һәр бер һүҙемә.
Атаһынан күргән уҡ юныр ҙа,
Уғы үтер энә күҙенән.

Ябай түгел ҡулымдағы йәйә -
Ил ирҙәре тотҡан әҙернә.
Кереше лә - илдең күңел ҡылы,
Йә, тыңларға йәнең әҙерме?

Һүҙ тыңларға йәнең әҙер булһа,
Һүҙ әйтергә күңелем тулышҡан.
Атылырға торған уҡ шикелле,
Бөлдөргөһө баҫҡан һулышҡа.

Белдеклегә бер әйтеү ҙә етер,
Белдекһеҙгә мең дә аҙ булыр.
Һүҙ ҡәҙерен белмәҫ ата улы
Үҙ ҡәҙерен белмәҫ таҙ булыр.

Алдан шуны әйтеп ҡуймаҡ булдым,
Китмәҫ борон һүҙгә керешеп.
Кереш тартмайынса уҡ атылмай,
Сәпкә тоҫҡап тарттым керешен...
Тыңла, улым...

*Салауат Рәми улы Учалы ҡалаһында йәшәй. Ғаиләле. Ҡатыны Нурсилә. Балалары: Рөстәм - армияла, Руслан - БДУ студенты. Ҡыҙҙары - Миләүшә, Нәркәс. Иң бәләкәстәре - Юлай.*

## Сабый йоҡоһо

**Ҡыҙым Гөлнараға**

Мин көнләшәм ҡайсаҡ Сальериҙан,
Юҡ, Моцарт та булмаҫ кешенән:
Уртаса бер фотограф та хатта
Бәхетлерәк була эшенән.
Уға ла бит тормош, был тәбиғәт
Үҙенең бер бөйөк телдәрен
Бүләк итеп ҡуя ҡайһы саҡта:
Бына, ҡыҙым, тибеп мендәрен,
Башы түбән иҙерәп йоҡлап ята,
Әсәһенең сығып ҡуйынынан.
Юҡ, ҡулҡайын түгел, бер тәпәйен
Ташлап яткан уның ҡуйынына!..
Был тиклем дә мәрәкәне миңә
Ҡалай итеп тотоп ҡалырға?
Ҡайҙа миндә Леонардо ҡулы
"Мадонна һәм ҡыҙы"н яҙырға?
"Бите - алма, ирендәре - сейә,
Ә ҡулдары - аҡҡош ҡанаты", -
Тигәйнем дә... Был тапалған һүҙҙәр
Ни генә һуң бирһен аңлатып?
Теләһәң, һин сәсең йолҡоп ила,
Был илаһи бер мәл юғалыр,
Осоп китер күккә фәрештәләй,
Көнләшеүем минең шуғалыр...
Ҡабатланмаҫ ошо матурлыҡты
Күрә алмаҫ үҙе Гөлнарам.
Тик атаһы күрә күҙ йәш аша
Был донъяла шундай гөл барын...

*Гөлнара Рәми ҡыҙы Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка мәктәбендә музыканан уҡыта. Башҡорттар араһында беренсе профессор-геолог Ҡадир Тимерғазиндың ейәне Ҡадир менән Әйшә, Рәмилә исемле ҡыҙҙар үҫтерәләр.*



РӘМИ ҺҮЗЕ

**Рәми Ғарипов яҡты донъянан киткәс, 24 йыл үткәндән һуң, ҡатыны Надежда Васильевна хат рәүешендә үҙенең хәтерләүҙәрен яҙа. Уны "Рәмигә хат" тип атай. Был хат 2001 йылда нәшер ителгән йыйынтыҡҡа индерелгән. Унан бер өҙөк тәҡдим итәбеҙ:**

# ЯҘЫУСЫ ҠАТЫНЫНАН ҒЫНА ТҮГЕЛ,

## тол ҡалған ҡатынынан да уңһын

"1955 йылда Беренсе майҙы дуҫтарың менән бергә ҡаршылағас, таң алдынан ҡайтып киттек. Ҡош тауыштарын тыңлай-тыңлай барған саҡта һин, беҙ өйләнешергә тейешбеҙ, тинең. Белмәйем, был һүҙҙәргә мин шатландыммы-юҡмы, әммә һин миңә кәрәк инең. Мин һинең ниндәй уйҙар менән йәшәгәнеңде белә инем инде, сөнки улар минең өсөн уртаҡ ине. Һинең "Йәншишмә" тигән шиғырыңды яҙыуың да юҡҡа түгел бит.

*Тойҙом һинең ҡайнар һулышыңды,*
*Һин тойғандай минең һулышты.*
*Әйтерһең дә, шул саҡ был донъяла*
*Үлем менән йәшәү һуғышты.*
*Һәм беҙ еңдек! Еңдек ҡарт үлемде,*
*Йәншишмәнең таптыҡ үҙен беҙ.*
*Мин үлемһеҙ иткән кеүек һине,*
*Һин дә иттең мине үлемһеҙ.*
*Үлем үлде! Беҙҙән һуң да ерҙә*
*Үҫер, емеш бирер гөлөбөҙ.*
*Йәншишмәкәй ул Мөхәббәт икән,*
*Йәншишмәнән эскән - Үлемһеҙ.*

Аҙағыраҡ һин миңә Переделкинолағы бер урынды күрһәттең дә, шул урында яҡташтарыңды йыйып, уларға миңә өйләнәсәгеңде хәбәр итеүең һәм студенттарса туй үткәреүҙә ярҙам итеүҙәрен һорауың хаҡында әйттең. Улар кире ҡағып маташҡан. Һин фани донъянан киткәс, беҙ Рафаэль (Сафин - **З. Б.**) менән һөйләшкән саҡта һинең иң беренсе хатаңдың иртә өйләнеүҙә булғанлығын әйтте. Бәлки, ул хаҡлылыр?

Өйләнешеп ике йылдай ваҡыт үткәс, һин миңә: "Мин һинең барыһын да сыҙам үткәререңә ышанғайным", - тинең.

Бер ваҡыт Эдвард Радзинский радио аша: "Яҙыусылар ҡатындарынан ғына түгел, ә тол ҡалған ҡатындарынан да уңырға тейеш", - тигәйне...

Бына шулай, һин йырлайһың, мин ҡушылам, тағы һине тыңлайым, ә һин йылмаяһыңмы икән?

...Эй, Хоҙайым, ваҡыт ни тиклем тиҙ үтә. Әле бына уйлап ултырам, уйҙарым тарҡау. Иң мөһимен яҙғы килә. Һинең шиғырҙы нисек яҙыуың менән ҡыҙыҡһыналар. Был һорауға ни тип яуап бирергә? Һин даими эшләнең, туҡтау белмәнең. Ҡунаҡтамы, поездамы, автобустамы - һинең яҙыу дәфтәрең һәр саҡ үҙең менән булды. Һин үҙең дә, көн һайын, һис юғы өс юл булһа ла яҙырға кәрәк, ти торғайның. Һәм һин эшләнең. Мин, мөмкин булған тиклем шарттар тыуҙырырға ынтылдым. Донъя мәшәкәттәрен үҙ өҫтөмә алырға тырыштым, һин эшләгән саҡта балаларҙы алып сығып китә торғайным.

Күпме яҡты көндәр иҫтә ҡалған..."

### АУЫР БУЛЫР ҺИҢӘ...

**Надяға**

Ауыр булыр һиңә минең менән
Уртаҡ яҙмыш бүлеп йәшәүе, -
Юлымда бар тау-таш, боролмалар,
Күк күкрәүе, йәшен йәшнәүе...

Ауыр булыр һиңә минең менән,
Зарланырһың бөтмәҫ эшемдән.
Яратмай тип, бәлки, шикләнерһең
Ғүмергә дуҫ, яҡын кешеңдән.

Ауыр булыр һиңә минең менән...
Тик булмаҫ һис кенә күңелһеҙ:
Һинең менән мин сабый ҙа булам
Һәм таба ла беләм көлкө һүҙ...

*КҮРЕП БЕЛМӘҺӘК ТӘ...*

# "Умырзая йыры"нан

Уның "Умырзая йыры" исемле китабын ятаҡҡа бүлмәләш дуҫыбыҙ алып ҡайтҡайны. Ауыл хужалығы институтында беҙ ул китапты ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ, фекер алыштыҡ. Ни тиһәң дә, ундағы шиғырҙарҙың күпселеге әлегә тиклем беҙ уҡыған шиғриәттән ҡырҡа айырылып тора ине. Партияға, оло илебеҙгә дан юҡ унда, ергә, телгә һөйөү ҙә күберәк әрнеү ҡатыш яңғырай. Ул саҡта рус телендә шиғырҙар яҙып булашҡан минең өсөн Рәми Ғарипов ысын мәғәнәһендә асыш булды, сөнки йыш үткәрелеп торған әҙәби кисәләрҙә булырға тура килһә лә, тәрән йөкмәткеле шиғырҙар ишеткән юҡ ине. Рәми Ғариповты ла беҙ мәктәптә "сыйырсыҡ, сыйырсыҡ, ояңдан осоп сыҡ" тигән шиғыры аша ғына белә инек. Торғонлоҡ тип аталған системаға яҙыусы халҡы ла бик оҫта яраҡлашып алды бит: мөхәббәт лирикаһы, йә тыңлаусылар тарафынан һәр саҡ ҡул сабып ҡаршы алынған шаян шиғырҙар ғына репертуарҙа.

Рәми Ғарипов китабы йоғонтоһо аҫтында институт тамамлауға минең бер дәфтәр башҡортса шиғырҙар тупланмаһы йыйылғайны. Ул дәфтәр әле лә ҡәҙерләп һаҡлана. Сит яҡтарҙа йөрөп, кире Өфөгә әйләнеп ҡайтҡас, минең өсөн Рәми Ғариповты икенсе тапҡыр асыу булды. Быныһы инде - уны күреп белгән ҡәләмдәштәре, яҡын дуҫтары менән танышыу аша. Яңырыу кисергән башҡорт әҙәбиәте, шиғриәте тураһында йәштәр араһында ҡыҙыу бәхәстәр тыуғанда Рәми миҫалы һәр саҡ алда йөрөнө. Уның ижады ла, тормош юлы ла, гражданлыҡ позицияһы ла 90-сы йылдар йәш ижадсылары өсөн өлгөгә әйләнгәйне. Тап шул саҡта башҡорт иле, теле өсөн көрәшкә йәш быуын ихласлап ҡушылып китте лә инде. Бына ҡайҙа ул тос һүҙҙең арбау көсө, шағирлыҡтың ысын асылы!

Ауыл хужалығы институты студентын шиғриәте менән арбап, уны әҙәбиәт юлына төшөрөүҙә Рәми Ғариповтың йоғонтоһо ни ҡәҙәр булғандыр, әйтеүе ҡыйын. Бына хәҙер үҙем, ҡасандыр ул эшләгән һымаҡ, төндәргә тиклем ҡалып, журналдың яңы номерының эстәлеген төҙөп, йә аулаҡ мәл бүләк иткән форсаттан файҙаланып көндәлектәр яҙып ултырғанда, ул иҫкә төшмәй ҡалғаны юҡ. Йә осраҡҡа тура килеп, берәй ҡанатлы юлы күңелгә керә уның, йә дуҫтарының уның хаҡында һөйләгән берәй ваҡиғаһы иҫкә төшә. Барыһы ла студент дуҫымдың "Умырзая йыры" китабын алып ҡайтыуынан башланғайны, уныһы хаҡ.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

**✓ Мин Рәмиҙең дә теге ҡыҙҙы яратыуын белгәс, аптырап ҡалдым. Уның мөхәббәте океан һымаҡ тәрән, киң, ә минеке бик бәләкәй генә тойолдо үҙемә.**



РӘМИҘЕҢ ДУҪТАРЫ

# Рафаэль Сафин хаттары

**Рафаэль Сафин менән яҙышҡан хаттарҙың һәр береһендә бер-береһенең шиғырҙары тураһында хәбәрләшеү, яңы баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәр хаҡында фекер уртаҡлашыу, уртаҡ маҡсат - халыҡҡа хеҙмәт итеү тураһында һөйләшеү алып барыла... 18-19 йәшлек был егеттәрҙең үҙҙәрен киләсәк өсөн һәр тарафтан әҙерләүгә айныҡ ҡараш йөрөтөүҙәренә хайран ҡалырлыҡ. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: Рәми дуҫының хаттарын матур итеп тәҫләп, бергә туплай барған һәм хатта яҙылған һәр бер фекергә ҡарата үҙ фекерен дә теркәй барған.**

23.12.50.

Рәми!

Мин һинең ике хатыңды алып та яҡшылап яуап яҙа алмауым, әлбиттә, ғәфү итерлек түгел...

Һинең 3 декабрҙә яҙған хатың мине бик ҡаушатты, бошондорҙо. Күҙ алдынан ниндәйҙер ҡурҡыныслы ут саткылдары сәсрәп үтте. Бүлмә буйлап арлы-бирле йөрөй башланым.



Рәми, һин бик еңелергә тырышма инде.

Мин илем, Ватаным өсөн нисек тырышам икән, һин дә ошо Ватандың улы, шул тиклем дуҫ өсөн дә тырышырға тейешлемен. Минең йөрәктә үҙемдән дә алда дуҫтар тураһында ҡайғыртыу ялҡыны ҡайнарға тейеш. Һәм беҙҙең маҡсатыбыҙ ҙа шул.

Рәми, китаптарҙы күп һалып булманы инде. Рәшит Ниғмәтиҙең йыйынтыҡтарын табыуы ҡыйын. Китаптарҙы һалғас ҡына бер йыйынтыҡ таптым, уныһын Мәрйәм апаға (Ғималова - Рәмиҙең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - З. Б.) бирҙем, ул башҡа китаптар менән бергә һалырмын, тине. Күптән түгел Мәрйәм апа һиңә 150 һум аҡса ебәрҙе. Почтаға Сәфәр менән икәү илтеп һалдыҡ.

11-се номер журнал сыҡманы әле, һинең шиғырҙар булырға тейеш.

(Хатта артабан яҙыусылар тормошо, һайлау, Мостай Кәрим менән һөйләшеү яҙылған)

Рәми, аҙаҡҡы хатыңда М. Горькийҙың "Әҙәбиәт тураһында"һын уҡып сыҡ тигәнһең. Мин уны уҡып сығып киләм инде. "В. Г.Короленко"ға еттем. Мин үҙемде сикһеҙ бәхетле тоям уны уҡығанда.

(Артабан бер шиғырын яҙа, Рәмиҙең дә шиғырҙарын даими яҙып ебәреп тороуын үтенә. Хатын былай тип тамамлай: "Рәми, Мостай Кәрим Иҙел булып ташһа, беҙ Йүрүҙән, Әй булып ҡушылырбыҙ").

* * *

26. 12.

Рәми, ошо арала аҡсаға ярлыланып киттем. Һин миңә үҙем кеүек яҡынһың, үҙемә ҡалмаһа ла һалырға кәрәк. Сөнки минең бында детдомдағы тормош менән һинең студент тормошон бергә ҡуйып булмай. Мин дә ике йыл студент тормошо менән йәшәнем, минең дә ике көнгә бер ашаған көндәр булды. Еңел түгел, әлбиттә. Шуның өсөн дуҫ дуҫҡа ярҙам итергә тейеш, тип уйлайым.

Ә мин үҙем һиңә нәмә эшләй алам һуң?

...Һинең ярҙамың, һис шикһеҙ, күп булды. Мин һине, беренсенән, иң яҡын дуҫым тип әйтһәм, икенсенән, минең ярҙамсым, бер уҡытыусы дуҫтым тип тә әйтә алам. Был ғәжәп түгел. Дуҫ дуҫҡа бик ҙур тәьҫир бирергә мөмкин һәм был тәьҫир уның киләсәк аҙымына, ынтылышына ҙур ярҙам, этәргес көс булырға тейеш.

Рәми!

Үҙең нисек уйлайһыңдыр, һин минең тормошомда быға тиклем булмаған иң, иң яҡын дуҫ, ярҙамсы булдың һәм киләсәктә лә беҙ бер-беребеҙгә иң яҡын ярҙамсы булырбыҙ, тип уйлайым.

Дуҫтар!..

Был ниндәй гүзәл күренеш! "Ниндәй ҡайнар, көслө һеҙҙең дуҫлығығыҙ!" - ти Мәрйәм апа.

* * *

Сәләм Өфөнән.

Рәми!

Беҙҙең бурыс бөйөк халыҡтың бөйөк хеҙмәтен дөрөҫ һүрәтләү. Улай ғына ла түгел, хеҙмәт халҡының талабынан сығып, юғары әҫәр тыуҙырыу.

Тик дөрөҫлөк, халыҡ эше өсөн

Көрәшеп йәшәү беҙҙең маҡсаттар.

Тик көрәштә генә гүзәл йәшлек,

Киләсәк һәм бөйөк бәхет бар.

# Ғашиҡ инек...

## икәүебеҙ бер ҡыҙға

**Рәмиҙең дуҫтары араһында быға са әллә ни ишетелмәгән яңы исем бар. Ул - мәктәпте Рәмиҙән бер йыл һуңыраҡ, 1951 йылда тамамлаған Булатасов Рәхим Исмәғил улы. Ул Шағирҙың юбилейына ҡарата ошондай көтөлмәгән һәм ҡыҙыҡлы хат килтереп китте.**

"Рәмиҙең көндәлектәрен уҡый барам. Һәм мин унда үҙемде таныным. Ғөмүмән, ул интернатташтарының исемдәрен үҙгәртмәй алған. Ә минең исемемде Илдар тигән. Уның үҙ сере бар. Мәктәптә уҡыған саҡта беҙ икебеҙ бер ҡыҙҙы яратып йөрөгәнбеҙ. Мин ул ҡыҙға үҙемдең һөйөүем тураһында бер дәфтәр яҙып биргәйнем. Рәми уны уҡыған. Уҡыған да миңә лә үҙ көндәлектәрен уҡытты. Мин Рәмиҙең дә теге ҡыҙҙы яратыуын белгәс, аптырап ҡалдым. Уның мөхәббәте океан һымаҡ тәрән, киң, ә минеке бик бәләкәй генә тойолдо үҙемә. Мин уға, әгәр ҡыҙ һине ятатһа, мин уның менән дуҫ ҡына булып ҡалырмын, тинем. Сөнки Рәми беҙҙең интернатта шул тиклем абруйлы ине, ул яратҡан ҡыҙға ҡарата һөйөү хистәре йөрөтөү уға хыянат итеү һымаҡ ине. Рәмиҙе бөтөн мәктәп ихтирам итте. Уның һүҙенә уҡыусылар ғына түгел, хатта уҡытыусылар ҙа ҡолаҡ һала ине.

Бер миҫал. Бер ваҡыт бер егетте интернаттан ҡыуырға булғас, Рәмиҙең уны яҡлауын һоранылар. Рәми йыйылышта шундай итеп сығыш яһаны, хатта, фәҡәт ҡыуырға ғына, тип үҙ һүҙендә ҡаты торған завуч та уның фекеренә ҡолаҡ һалды. Ул егет мәктәптә ҡалдырылды һәм һәйбәт тамамлап сыҡты.

Рәмиҙе бөтөн мәктәп "Бабай" тип йөрөттө. Ошондай ҙур абруйлы кеше яратып йөрөгән ҡыҙҙы ҡаратып алырға нисек баҙнатым етһен?

Мин дә шиғырҙар яҙа инем. Шағирлыҡ һәләте булғанға түгел, ғөмүмән, хис-тойғоларҙы йыр йәки шиғыр менән аңлатыу, нисектер, матурыраҡ килеп сыға бит. Йәш саҡта ғына түгел, әле лә яҙам. Уның сәбәбен һөйләйем хәҙер.

**Рәмигә**

Уҡыу бөттөк, интернаттан киттек,
Һин – Мәскәүгә, Ул - Одессаға,
Ә мин хәрби юл һайлағас,
Волгоградҡа киттем - армияға.
Йылдар үтте, хеҙмәт юлдарында
Осрашырға тура килмәне.
Өсөбөҙ өс төрлө һөнәр алғас,
Алда бер-беребеҙҙе күрмәнек.
О, яҙмыш!
Өсөбөҙҙөң дә һин
Ҡанаттарыбыҙҙы ҡайырҙың.
Беҙҙең мөхәббәттән көлгән кеүек
Тәүге һөйөүебеҙҙән айырҙың.
Йылдар уҙҙы, һинең юбилейҙа
Уның менән йәнә табыштым.
Икебеҙ ҙә тол ҡалғанға күрә,
54 йылдан һуң ҡауыштыҡ.

...Бына шундай яҙмыш беҙҙең. Хәҙер икебеҙ ҙә ғашиҡ булған теге ҡыҙ - Мариәт менән бергә йәшәйбеҙ. Элекке тойғолар яңынан ҡабынды. Шуға шиғыр яҙғылап ҡуям. Рәмиҙе - беҙҙең яратҡан Бабайҙы бик йылы итеп хәтергә алабыҙ, һағынабыҙ, уның өсөн ғорурланабыҙ, беҙгә осорға ҡанат ҡуйған интернаттың Рәми Ғарипов исемен йөрөтөүенә ҡыуанабыҙ."

**Рәхим БУЛАТАСОВ.**

*КҮРЕП БЕЛМӘҺӘК ТӘ*

# ӘСӘМ-АТАМ ҺҮҘЕЛӘЙ

Бишенсе синыфта уҡыйым. Мәктәпкә осрашыуға килеүсе шағирҙар араһында Рәми Ғарипов та бар, тинеләр. Ул ваҡытҡа мин дә аҙыраҡ шиғырҙар яҙып маташа инем. Нисек көттөм мин ул осрашыуҙы! Һөйләп кенә аңлатырлыҡ түгел. Шағирҙың "Һабантурғай йыры" тигән йоҡа ғына шиғыр китабын тетеп уҡып, күп шиғырҙарын ятлап бөткәйнем. Әммә һуңғы мәлдә осрашыуға 7-се синыфтан өлкәндәрҙе генә саҡырҙылар. Осрашыу бөткәнсе ишек төбөндә тапандым. Ишек аша шағирҙың хисләнеп шиғырҙар уҡыуын ишеттем.Ул саҡтағы күңелемдең иңрәп һыҡтауын яңынан кисерһәм, күҙҙәремә әле лә йәш төйөлә: ысын шағир менән мине бары ишек кенә айыра ине бит. Шағирҙы күрмәй ҡалыуымда үҙемдең ҡыйыуһыҙлығым да ғәйепле, әлбиттә.

Әммә ошо көндән шуны аңланым - шағир һүҙен нисек йотлоғоп тыңланы балалар, тимәк, шиғри һүҙҙең ҡеүәте ҙур. Минең әҙәбиәт, шиғриәт менән "ауырыуым" тағы ла көсәйҙе шул көндән. Инде шиғырҙарымды йәшермәй башланым. Уҡытыусылар, дуҫ-иштәремә уҡыным. Бына бит нисек, Рәми Ғариповтың беҙҙең мәктәпкә килеүе генә лә күңелдәрҙе шиғриәт сихырына сорнаны. Был ваҡиғаны ғүмеремдә лә онотасаҡ түгелмен. Әле лә, мәктәпкә осрашыуҙарға барһам, теләгән уҡыусыларҙың барыһын да саҡырыуҙарын һорайым. Минең кеүек, ишек төбөндә тапанып ҡалмаһын берәйһе, тием. Сөнки аҙаҡ Өфө ҡалаһына уҡырға килһәм дә Рәми ағайҙы күреү бәхетенә өлгәшә алманым, ул беҙҙе мәңгелеккә ҡалдырып киткәйне инде.

Рәми Ғариповтың минең генә түгел, күптәрҙең ижадына тәрән йоғонто яһаған шиғриәтен мин әсәйем, йә атайымдың әйткән һүҙҙәре кеүек ҡабул иттем. Рәми Ғарипов шиғырҙарының көсө лә шундалыр, тием. Шағир теге йәки был ышаныуҙары, күңел кисерештәрен башҡа бер кем ҡушҡанса, теге йәки был ҡалыпҡа һалып түгел, ә бары тик үҙ намыҫы бизмәнендә үлсәп, үҙе кисергәнде йәки үҙе күрергә теләгәнде генә яҙған. Шуға уның һәр һүҙенең тәҫьире көслө, уларҙың хәҡиҡәт икәненә бер ниндәй ҙә шик ҡалмай. Бына ҡайҙа ул талант көсө! Мәрхүм тәнҡитсе, университеттағы остазыбыҙ Ким ағай Әхмәтйәновтың дәрес һайын ҡабатлағаны иҫемдә: " Шиғыр яҙыуы бик үк ауыр ҙа түгелдер, бына үҙеңдең генә шиғырыңды яҙыу - еңел түгел". Рәми Ғарипов бөтә ғүмере буйына бары тик үҙенең генә шиғырҙарын яҙған. Шуға ла ул бөгөн ысын кеше, яҡты ла, ҡатмарлы ла күңел кисерештәре менән мәж килеп йәшәгән көслө шәхес булып һынлана.

**Лилиә ҺАҠМАР.**

✓ *Студент Рәми Мөхәмәтша Буранғоловтың яҙмаларын архивта ашығып-ашығып күсереп ултырған ваҡытта милләтселектә ғәйепләнгән Мөхәмәтша Буранғолов Тайшет лагерында ғүмеренең иң ҡара көндәрен үткәрә.*



ШАҒИРҘЫҢ АРХИВЫНАН

**Рәми Ғариповтың архивы - халҡыбыҙҙың әлегә асылмаған бер хазина һандығы, тиһәк тә була. Ул шул тиклем күп яҡлы, мәғлүмәтле, ҡыҙыҡлы. Төрлө әҙәби, фольклор, тәржемә материалдары тупланған ҡалын-ҡалын папкаларҙан, көндәлек яҙмаларҙан башҡа уның бик күп үҙенсәлекле ҡулъяҙма китаптары бар. Мәҫәлән, бер ҡалын ҡулъяҙма китабында шағир Ғүмәр Хәйәмдең һәр шиғри дүртъюллығын айырым бер биткә матурлап яҙған, ә төрлө төҫтәге ручкалар менән башҡа шағирҙарҙың тәржемәләрен теркәгән. Ошо дәфтәрҙә нисек бар - шулай баҫтырһаң, тәржемәселәргә, йәш әҙиптәргә бына тигән бер әсбаб буласаҡ! Шағирҙың ҡатыны Надежда Васильевна һөйләүенсә, Рәми ағай ҡулъяҙмаларҙы баҫтырыуға, уларҙы көплөтеүгә йәки ҡиммәтле дәфтәрҙәргә бик күп аҡсаһын сарыф иткән.**

# Асылмаған хазиналар һандығы -

## шағирҙың ҡулъяҙма китаптары

**I.**

Рәми Ғарипов студент сағынан уҡ Мәскәүҙән Өфөгә ҡайтҡан ваҡыттарында башҡорт халыҡ ижадын өйрәнер өсөн Дәүләт архивында ултыра торған булған. 1952 йылдан башлап студент Рәмиҙең китапханаһында матур яҙыу менән күсерелгән "Урал-батыр", "Аҡбуҙат", башҡа эпостар һәм фольклор өлгөләренән торған ҡулъяҙма китаптар урын ала. Белеүебеҙсә, Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған эпостар 1967 йылда ғына донъя күрә. Тимәк, Рәми ул эпос менән башҡаларға ҡарағанда күпкә алдан танышҡан. Ул ғына ла түгел. Башҡорт халыҡ ҡомартҡыларының байтағы юҡ ителгән, архивыбыҙ бик йыш юҡҡа сығыу кимәленә барып еткән. Бер генә миҫал: Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында эвакуацияланған архивты һаҡлар өсөн беҙҙең архивты соланға сығарып ташлағандар. Ул соланға ямғыр ҙа, ҡояш та үткән, уларҙы ҡараусы ла, һаҡлаусы ла булмаған... Артабан да архив менән эш итеүселәрҙең йүнлеһе лә, йүнһеҙе лә булған. Мәҫәлән, Мөхәмәтша Буранғоловтоң дәфтәрҙәренән күпләп биттәр йыртылып алынғаны мәғлүм.

Тағы бер нәмә уйландыра һәм һоҡландыра. Студент Рәми Мөхәмәтша Буранғоловтың яҙмаларын архивта ашығып-ашығып күсереп ултырған ваҡытта милләтселектә ғәйепләнгән Мөхәмәтша Буранғолов Тайшет лагерында ғүмеренең иң ҡара көндәрен үткәрә. Әлбиттә, Сталин заманында йәшәгән студент Рәми Ғарипов, әлбиттә, көндәлектәренә бөтөн уй-фекерҙәрен теркәмәгәндер. Әммә уның ҡулъяҙма китаптары үҙе өсөн генә түгел, ә тотош халыҡ өсөн кәрәкле тигән ҡыйыу уйҙан сығып эшләнмәне микән? Мөхәмәтша Буранғоловты әҙәрлекләү уның ҡулъяҙмаларына ла ҡағылыр, улар юҡ ителер, тигән борсолоуҙан килеп сыҡманы микән был ғәйәт күп ваҡыт, сабырлыҡ талап иткән ҙур эш? Кем белә, бәлки мәкерле уйлы кешеләр "Урал-батыр" һәм башҡа эпостарыбыҙҙы нәшер ителгәнгә тиклем юҡ итергә уйлаһа, халҡыбыҙ студент Рәмиҙең ошо ҡулъяҙма китаптарына ғына ҡарап ҡалыр ине...

Рәми Ғариповтың башҡорт фольклорына һәм тарихына ҡағылған ҡулъяҙма китаптарының исемдәрен телгә алып үтәйек:

1. Ҡараһаҡал. 1953 йыл, Мәскәү.
2. Урал-батыр. Өфө, 6-9 ноябрь, 1958 йыл (Ҡалын, ҡиммәт дәфтәргә бик матур итеп күсерелгән).
3. Иҙеүкәй менән Мораҙым (машинкала баҫылыу датаһы - Өфө, 1958). Көпләнгән.
4. "Боронғо башҡорт көйҙәре тарихынан" (Легендалар). Өфө - 1970 йыл.
5. Хәбибулла Ғәбитов. Ынйыҡай менән Юлдыҡай (тарихи пьеса - 4 актта. "Ынйыҡай менән Юлдыҡай" хикәйәһенән алып яҙылды).
5. Черновики перевода доношений Батырши императрице Елизавете. 2 ҡалын дәфтәргә күсерелеп яҙылған, аҙаҡтан машинкала ла баҫтырылған. 1970 йыл менән билдәләнгән.
6. "Юлай менән Салауат". 1969 йыл. Бик матур көплөтелгән, машинкала баҫтырылған.

Шағирҙың фольклор экспедицияһы ваҡытында яҙып алған әкиәттәр ҡулъяҙмаларын Надежда Васильевна бер заман Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтына әкиәттәр баҫтырылған ҡалын папкаларҙа тапшырған. Уларҙың артабанғы тарихын асыҡлау ҙа ҡыҙыҡлы булыр ине...

Шулай уҡ архивта ҡалын папкала публицистик ҡулъяҙмалары ла һаҡлана.

**II.**

1973 йылда "Башҡорт халыҡ ижады" томдарының береһендә тәүге тапҡыр "Зөһрә менән Алдар" эпосы баҫылып сыға. Билдәле булыуынса, уны руссанан "Мои вечера. Сказки башкирские" тигән ҡулъяҙма тексынан башҡортсаға Рәми Ғарипов тәржемә итә. Шағирҙың архивында ошо тәржемә менән "Ҡыҙбатыр һәм Ҡырбатыр" исемле бик матур ҡулъяҙма китап та бар. Ниәмһе ҡыҙыҡ, шағир бер рәссам менән ул китапҡа һүрәттәр ҙә әҙерләгән. Күрәһең, айырым баҫмаға өмөт ителгәндер.



Һүрәттәр бик матур, башҡорт яугир рухы менән һуғарылған. Ошо һүрәттәрҙең береһен гәзит уҡыусыға тәҡдим итәбеҙ. Билдәһеҙ рәссам йәки был ижади бәйләнештең шаһиттары беҙгә Шағирҙың тормошоноң яңы биттәрен асмаҫ микән, тигән өмөттәбеҙ. Зинһар, яҙығыҙ, шылтыратығыҙ!

**III.**

Әйткәндәй, асыштар ҙа юҡ түгел. Әлбиттә, уларҙы еренә еткереп эшкәртер өсөн ваҡыт кәрәк, әммә "Киске Өфө" уҡыусыларын шул асыштарҙың ҡайһы берҙәре менән әленән үк уртаҡлашҡы килә.

1995 йылда "Китап" нәшриәтендә "Мөхәмәтша Буранғоловтың "Сәсән аманаты" исемле китап донъя күрә. Уның төҙөүсеһе ғалим Берйән Байым баш һүҙҙә ошолай тип яҙа: "Сәсәндең үҙе сығарған "Ватан һуғышы" һәм халыҡтан яҙып алып, фольклор традициялары нигеҙендә эшкәрткән "Юлай менән Салауат", "Ҡараһаҡал" ҡобайырҙарына төҙәтмә индерелмәне". Аңлатмаларҙа иһә "Ҡобайырҙар" тигән бүлеккә (ул бүлеккә өҫтә әйтеп үтелгән әҫәрҙәр ингән) ошолай тип яҙыла: "Ҡобайырҙар. Халыҡ ижады әҫәрҙәре булып йөрөгән был ҡобайырҙар М. Буранғоловтың үҙе тарафынан ижад ителгән. Улар халыҡ араһында йөрөгән легендаларға нигеҙләнеп яҙылған". Ҡыҫҡаһы, "Ҡараһаҡал" эпосын М. Буранғолов үҙе ижад иткән, тип фараз ҡылына.

Хәҙер иһә Рәми Ғариповтың 1953 йылғы "Ҡараһаҡал" ҡулъяҙма китабына күҙ һалайыҡ. Эпостан һуң "Был легенда 1907 йылда Баймаҡ районының Идрис ауылында Ғәбит тигән ҡурайсынан яҙып алынған (Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған)" тип яҙылған.

Ҡобайырҙың үҙенә килгәндә, студент Рәмиҙең ҡулъяҙма китабында уның айырым һүҙҙәре икенсерәк, һәм өҫтәмә бер шиғри прологы бар. Ошо прологын яҙып үтәйек:

Ай, Уралым, Уралым!
Бөтә данды үҙендә
Йыйып үҫкән Уралым!
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған Уралым!
Яусыл булған атама
Ата булған Уралым!
Юнсел булған әсәмә
Ватан булған Уралым!
Икеһе бергә йоп ҡылып
Түл йәйҙергән Уралым!
Ҡарағайын үҫтереп,
Ҡош үрсеткән Уралым!
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Яу астырған Уралым!
Атамды яу саптырып,
Әсәмде тол ҡалдырып,
Ике күҙен йәшләтеп,
Ҡәйнә булған Уралым!

Хәҙер һиңә ни тием?
Битен илгә ят иттең,
Урман, туғай, ҡырыңды
Баяр тигән дошмандың
Заводына яй иттең.

Ирҙәреңдең үлгәне -
Буйың дошман алғаны,
Аҡҡа тиреҫ төшкәне,
Уҡый алмай торғаны.

Бол-бол өйрәк, бол өйрәк,
Болдороп осор күл кипкәс,
Батыр-батыр ирҙәрең
Мөлдөрәп ҡалыр һин киткәс.

Күл яғалай күк тирәк,
Күк тирәктең һыны юҡ -
Япраҡтарың ҡойған һуң;
Күгәреп яткан Уралдың
Буйында хәҙер йәме юҡ
Баяр завод ҡорған һуң.

Шундай яман дошман ул,
Йәйәү килер йортоңа,
Яғалы сәкмән кейҙерер,
Бал-май яғыр мороноңа.
Ҡырҡмай ағыҙыр ҡаның,
Үлтермәй алыр йәнең,
Ҡағыҙға яҙыр малың,
Иҫәпкә алыр барын.

Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан,
Типһеҙҙе түргә сығарып
Башыңа ауыр эш төшһә,
Һис эш килмәҫ ҡулыңдан.
Сәйет, Көсөм батырҙар
Көндәй белгән был эште,
Ҡыҙыл ҡанға быуылып,
Йән аямай юл асты.

**Рәми Ғариповҡа арналған материалдарҙы**

**Зөһрә БУРАҠАЕВА әҙерләне.**







Шағирҙың төрлө йылдарҙа тыуған көндә яҙған яҙмалары

***✓ Бөйөк шәхестәребеҙҙең һуңлап булһа ла ҡәҙерен белергә өйрәндек, киләсәк быуындар ҙа белер. Тик ваҡытында белһәләр, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтһәләр, бәлки, Рәми Ғарипов рәнйеп китмәҫ ине был донъянан...***

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан китаптары, көндәлектәре үҙ уҡыусыларына, халҡына барып етһә лә, бөйөк шәхесебеҙҙең бөтөн булмышы, асылы, сере әле тулыһынса асылып бөтмәгән һәм бөтмәйәсәктер ҙә. Бындай серлелек, күрәһең, тик бөйөктәргә генә хастыр. Уның көндәлектәрен, әҫәрҙәрен ҡат-ҡат уҡығандан һуң Рәми Ғариповҡа ғына хас яңынан-яңы һыҙаттар, сифаттар асылғандан асыла бара.**

# КҮРӘҘӘСЕ ЛӘ УЛ-

## үҙ яҙмышын алдан тойҙо...



Азамат ҒАРИПОВ һүрәте.

Күрәҙәселек итеү күптәргә бирелмәй шул! Үҙенең булмышын, яҙмышын күрә, тоя белде шағир. Ул үҙенең был донъяға оҙаҡҡа килмәүен дә, ҡыҫҡа тормош юлында шашып яратырға, яратылырға, балаларын ысын башҡорт итеп тәрбиәләргә, үҫтерергә кәрәклеген алдан һиҙҙе, күрә белде һәм шулай эшләне лә. Шуғалыр ҙа инде, ашығып, ашҡынып, тетрәнеп ижад итте, көйҙө, янды, ҡыуанды, көрәште.

1954 йылда уҡ Ғабдулла Туҡайға бағышлап яҙған "Шағир" исемле шиғырында 22 йәшлек Рәми беҙҙе шағир ҡәҙерен белергә саҡырҙы:

**Эй, кешеләр, үҙе иҫән саҡта**
**Белһәгеҙсе шағир ҡәҙерен!..**

Эйе, бөйөк шағирҙарыбыҙҙың, шәхестәребеҙҙең һуңлап булһа ла ҡәҙерен белдек, белергә өйрәндек, киләсәк быуындар ҙа белер. Тик заманында, ваҡытында белһәләр, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтһәләр, бәлки, Рәми Ғарипов иртә һәм рәнйеп китмәҫ ине был донъянан...

Уның 1964 йылдың 11 мартында яҙған көндәлек яҙмаларында ошондай һүҙҙәр бар: "... Шул маҡсат өсөн генә 8 йыл төрлө кешеләрҙең утын һарайында, тамаҡ бүлмәләрендә, тауар складтарында, юлаусылар йортонда, ҡунаҡханаларҙа йәшәп, ярты эш хаҡымды, ҡан йәшемде түгеп йәшәнем, эшләнем һәм бер генә юл да выжданыма, намыҫыма ҡаршы төшөп, аҡса өсөн яҙа алманым..." Быларҙың бөтәһен дә Рәми үҙенең әҫәрҙәре, китаптары халҡына барып етһен өсөн, уларҙың ғәҙел хөкөмөн ишетеренә өмөт итеп ижад итә, хатта халҡымдың киләсәге өсөн ҡорбан булыу миңә бер ни ҙә түгел, ти. Үҙе иҫән саҡта башҡаларға әллә күпме яҡшылыҡ, яғымлылыҡ, кешелеклелек, милләт ғәме, тормошто һөйөү, туған телгә хөрмәт тойғолары таратып өлгөрә.

Һәр бер ысын шағир үҙ ғүмерендә кешелектең бөтә үткән юлын, фажиғәһен кисерә, үҙенсә яңылыша, эҙләй, таба һәм үҙ һүҙен әйтеп китә. Рәми ағайҙы ла һәр саҡ: "Ысын кеше ниндәй булырға тейеш?" - тигән һорау борсоно. Ул: "Бөтә Дон-Кихоттар, минең арттан!.." - тип бөтә донъяға оран һалыусы һәм кешелек донъяһын ялған, яуызлыҡ, мәкер-хәйлә, дошманлыҡ, булдыҡһыҙлыҡ, ҡуштанлыҡ менән көрәшергә саҡыра. Мин икеләнмәйенсә әйтә алам: Рәми Ғарипов - шағир-публицист ҡына түгел, ә шул уҡ ваҡытта, шағир-бунтарь ҙа. Уның бөтә әсе яҙмышы, фажиғәһе лә ошондалыр, минеңсә.

Ер-Әсәнең бөтә һөйөнөсө, бөтә көйөнөсө, донъяның бөтә фажиғәләре шағир йөрәге аша үтергә тейеш, башҡаса мөмкин дә түгел. Был - шиғриәттең асылы, йәне, булмышы булырға тейеш. Әгәр ҙә башҡалар өндәшмәй, хатта ярамһаҡланып, тормошҡа "алһыу күҙлек" аша ҡараһалар, Рәми Ғарипов үҙенә бикләнеп кенә ҡалманы, ә, киреһенсә, яныу-көйөп, дөрөҫлөктө, ғәҙеллекте яҡлап ҡулына ҡәләм алды һәм ғүмеренең аҙағынаса үҙенең булмышына тоғро ҡалды. Уның шиғырҙарын, көндәлектәрен тыныс күңел менән, күҙ йәшһеҙ уҡып булмай. 1962 йылда яҙылған "Иң бөйөк һүҙ әле әйтелмәгән..." тип башлаған шиғырында уҡ шағир:

"Ул туйға мин, бәлки, барып етмәм,
Ярһыу атым яныу йығылыр..." - тип, беҙҙе алдан уҡ һағайтып, иҫкәртеп ҡуйғандай... Шул уҡ йылда яҙылған исемһеҙ шиғырында ошондай юлдар бар:

**Бәлки керләнеп тә бөтөрмөн мин,**
**Янған өсөн яла яғылыр...**

Эйе, яласылар һәр саҡ булды, улар бар, буласаҡтар, ләкин бөйөк мәғрифәтсе, аҡыл эйәһе Мифтахетдин Аҡмулланың беҙҙең көндәргәсә килеп еткән бик аҡыллы, фәһемле: "Саф алтынды нәжескә буяу менән, нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ..." - тигән һүҙҙәре Рәми Ғариповтың тормош юлына, ижадына, шәхесенә тулыһынса тап килә.

Шағир үҙенең киләсәген, яҙмышын дөрөҫ күҙаллаған, ләкин башҡаса булдыра алмаған. Уның тураһында Яҡуп Ҡолмойҙоң: "Башҡорттоң бөйөк милли шағиры", - тигән бик урынлы, фәһемле һүҙҙәре бар. Ошо һүҙҙәргә яуап итеп Рәми Ғарипов бик тыныс ҡына, маһаймайынса яуап бирә: "Бөйөк - ерунда. Тик милли тигәне миңә ҡарата дөрөҫтөр. Шунда ла - фажиғәле...", - тип шағир хаҡыҡсан шағир икәнен тағы бер тапҡыр раҫлай.

Тормошто Рәми Ғарипов Алырымҡош менән Бирмәмҡош символик образдары аша сағыштыра. Ошо аяуһыҙ тормошта уның аҡылы менән йөрәк ялҡыны ғүмере буйы алышты, тартышты...

Француз әҙибе Ренар: "Әҙип донъя мәҙәниәтендә бер китабы, хатта бер тапҡыр һүҙе менән ҡалһа ла бәхетле", тигән. Минеңсә, Рәми Ғариповтың бәхете - халҡының бөйөк милли шағирын һөйөүендә, шәхесебеҙҙе хөрмәт итеүендәлер... Бөйөк шағирыбыҙҙың исемен үҙебеҙгә, киләсәк быуынға тағы ла яҡынайтыр, мәңгеләштерер өсөн бөтәһе лә эшләнәме? Нимәләр эшләргә кәрәк? Был өлкәлә бер аҙ тынысланып ҡалғандай булдыҡ, шикелле... Халыҡ күңелендә мәңгелек йыр - "Рәми моңо", "Рәми йыры" йылдар аша көслөрәк, сағыуыраҡ ишетелә беҙгә...

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ,**
Ейәнсура районы, Яңыбай ауылы.

*КҮРЕП БЕЛМӘҺӘК ТӘ...*

# Шиғырҙары аша "дуҫлаштыҡ"

Рәми Ғарипов менән тәүге "күрешеүем" "Миләш-кәләш" китабы аша булды. Мәктәптә уҡыған саҡ. Беҙҙең ауылда китап магазины ла, китапхана ла юҡ. Ә әҙәби китаптарҙы уҡығы килә. Бер әмәле лә табылды: күрше йортта ғына тыуып үҫкән Марат ағай Әбүзәров Өфөлә "Ленинсы-Ленинец" гәзитендә баш мөхәррир булып эшләй ине. Ул байтаҡ ҡына китаптарын ауылға алып ҡайтып ҡуйған, шуларҙы һорап уҡыйым.

Бер саҡ ҡулыма "Миләш-кәләш" килеп эләкте. Үҙем дә шиғырҙар яҙып маташҡас, был китапты һоҡланып, ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. Шаштырып әйтмәйем, ул саҡта уҡыған шиғыр китаптары араһында иң оҡшағаны "Миләш-кәләш" булды. Был йоҡа ғына китапты әле генә тапҡан һымаҡ хәтерләйем. Тимәк, тәьҫирле булған.

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған йылдарҙа инде Рәми Ғарипов менән "дуҫлаштыҡ" тиһәм дә була. Хәйер, уның дуҫтары бер мин генәме ни, әҙәбиәт һөйөүсе бөтә студенттар исемен теләнән төшөрмәне, шиғырҙарын яттан һөйләп йөрөнө. Шиғырҙарынан тыш, Рәми ағайҙың көндәлектәрен мауығып уҡыныҡ, ҡәберенә сәскәләр һалдыҡ.

Рәми Ғариповты күрергә яҙмаһа ла, күреп белгән шағир һымаҡ күңелдә һаҡлана.

**Салауат ӘБҮЗӘР.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# Күңелең тынысланһын

**Һәр кем ниндәй ҙә булһа маҡсат ҡуйып, уңышҡа өлгәшергә теләй. Ләкин бында бер нескәлек бар. Маҡсат ҡуйылып, уға табан юлды дөрөҫ һайлап, Юғары көстәргә "ғариза" ла бирһәгеҙ, тынысланырға мөмкин. Даими күңел көсөргәнешлеге, тулҡынланыу, үҙ көсөңә шикләнеп йәшәү - ҡуйған маҡсатыңдан төңөлдөрөп ҡуйыуы бар. Иң мөһиме - Йыһандың ижади көстәренә ышанырға кәрәк. Сабыр бул. Барыһы ла үҙ мәлендә, тейешле урында хәл ителер.**

Уй-хыялдарыңды тормошҡа ашырыуға тыныс күңел менән ҡара, ябай күҙлектән сығып эш ит. Ни өсөн тигәндә, тормоштоң үҙ пландары ла булып, һинең теләктәреңде аҙыраҡ үҙгәртеүе ихтимал. Әгәр хәл-ваҡиғалар һинең файҙаға хәл ителмәй икән, тимәк, уйланған эште бойомға ашырыр мәл етмәгән әле, тип аңларға кәрәк. Ғөмүмән, бер ваҡытта ла эштең айышына төшөнмәй тороп, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай. Күңел һәр ваҡыт тыныс һәм уңышҡа ышаныу көсө ҡоростай ныҡ булһын. Ҡайһы берәүҙәр, нисек инде бер үк ваҡытта күңелдең ошо ике торошон бер кимәлдә тоторға мөмкин, тип һорар. Күнегергә кәрәк. Кеше өйрәнә алмаған нәмә юҡ. Икенсенән, һинең тынослығың һәм уңыш яуларыңа ышанысың коллегаларыңа ла ыңғай йоғонто яһаясаҡ. Ғөмүмән, эш менән мәж килгән коллегаларыңдан айырылып тороуың менән ғорурлан. Һин уларға еңеүгә ышаныс, өмөт уятаһың, тыныслығың менән өлгө күрһәтәһең. Ни өсөн тигәндә, үҙенә ышанған, көслө рухлы, маҡсатлы, егәрле кешеләргә генә файҙалы килешеүҙәр, яңы идеялар тәҡдим итәләр. Шуның өсөн "йәшәйештең өнһөҙ шатлығы" тигән күнекмә үткәрергә тәҡдим итәм.

Диванға ят та, күҙҙәреңде йомоп, иғтибарыңды тын алышыңа йүнәлт. Бер ике тапҡыр тәрән итеп тын алып, тыныңды яй ғына сығар. Яйлап уй тыныслығына сумырһың. Тәнем иң ҡеүәтле кран да тартып торғоҙа алмаҫлыҡ ауырайҙы, тип күҙ алдына баҫтыр ҙа, шул тойғонан сыҡмай ят. Ауырлыҡ бер аҙҙан бөтөн тәнеңдең иҫ киткес еңеллек тойоуы менән алмашыныр. Әйтерһең, һинең эсең саф һауа менән тула һәм быны-быны ятҡан урыныңдан күтәрелеп осоп китерһең һымаҡ. Бөтөн күңелеңде, аңыңды сафландырыусы һауа тулҡыны сығып бөткәс, күҙ алдыңда күҙ ҡамаштырырлыҡ зәңгәр күк йөҙө һәм көлтәләп йылы нур һипкән ҡояш пәйҙа булыр. Һин шул матурлыҡҡа сумып, иреп, үҙең дә тирә-йүнгә нур, яҡтылыҡ һирпеп тороусыға әйләнерһең. Өнһөҙ шатлыҡ кисереүҙән ләззәтләнеп, рәхәтләнеп ял ит. Яратыуҙың илаһи сығанағына яҡынлашыуыңды тойғас, уй-хыялдарыңды яңынан иҫеңә төшөр. Күңелдән ниҙер теләһәк, йыш ҡына ул шунда уҡ тормошҡа аша. Был күренештең бөтөн ғилләһе - кешенең дөйөм хәл торошо үҙен уратып алған донъя менән гармонияла. Шуның өсөн, ял итергә лә ваҡыт ҡалдырмай, көнө-төнө эш менән мәшғүл булырға ярамай. Тормош ағымы менән бер гармонияла булыу шатлыҡ артынан шатлыҡ алып киләсәк.

✓ *Йә, Хоҙай, эшләй белгәнде башҡарып сығыу өсөн көс бир, эшләй алмағанға күнеү өсөн түҙемлек бир, уларҙың береһен икенсеһенән айырыу өсөн аҡыл бир.*
**(Боронғо Көнсығыш аҡылы).**



# Рәми Ғариповҡа арналған кроссворд



**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**ГОРИЗОНТАЛЬ БУЙЫНСА:**

5. "(...) сәнғәт дошманы, ул традиция түгел. Традиция иҫке нигеҙендә яңыны тыуҙырыу, ә (...)- үлергә мәле еткән карттың меҫкен таяғы!". 6. "Машина, (...) кешеләргә уйланырға, хыялланырға, үҙ-үҙҙәре менән һөйләшергә ваҡыт ҡалдырмай, иң яҡшы кешелек сифаттарынан мәхрүм итә бит". 10. Был юлдар кемгә арналған?:

Шиғриәткә саҡырып килтермәйҙәр,
Шиғриәткә яулап инәләр.
Китер өсөн килә уға бары
(...) булып килгән генәләр.

11. Йоммайса йәшел күҙҙәрен,
Серем итә һил урам.
Баш осонда - ай мендәре,
Ҡош Юлы - уға - (...) 12. "Директор явно (...)тарҙан көлә. Мәктәп баҡсаһына төшкән бала-сағаның муйынына шалҡан аҫып ҡуйып мыҫҡыл итте".

15. "Ситлектәге ас арыҫлан һымаҡ,
Дулап йөрөй һыймай ярына.
Сал ялдарын сайҡап, асыу менән
Ҡорбанынмы көтөп ярһына?" Һүҙ нимә тураһында бара?

16. Яратты ул түрәлекте,
Белде түрәлек тәмен.
Түрә булыуҙа күрҙе ул
Йәшәүҙең бөтә (...)ен.

17. Ҡоромаһын бары йылғаң ғына,
Аҡҡан йылға табыр йылғаһын.
Арабыҙҙа бары йыр ҡалһын да
Арабыҙҙы (...) ялғаһын. 20. "Унының ҡайһы бер афоризмдары миңә сәйер тойола: "Гордость бесплодна, потому что ей ничего не нужно вне себя!!!" 21. Бюрократҡа арналған шиғыр юлдары:

- Ашарға ҡайт, - тиеп уға
Килгән икән ҡатыны.
- (...) яҙ, - тигән ти ул, -
Берҙе түгел, алтыны!..

25. Бишенсе курста ике көн ашамай ас йөрөгәс, шағир һатып ебәргән өҫ кейеме.

26. Табынырға мине көсләһәләр
Әгәр ерҙең берәй йәненә,
Мин табыныр инем донъяла тик
Ҡатын-ҡыҙҙың даһи (...)нә!

27. Йондоҙҙарға ышанырға була,
Мин уларҙың беләм ғәҙәтен:
Бер ҡасан да улар кешеләргә
Һөйләмәйҙәр кеше (...)тен.

31. "Шекспир, Маркс, Ленин, Горький - кешелек өсөн иң күп эшләгән кешеләр. Художник булыу яғынан (...) миңә бөтәһенән дә (Шекспирҙан башҡа) юғары".

32. Киләсәккә хаттар яҙған Таҡташ,
Туҡай йәшен булып йәшнәгән!
Һәм аҙашҡан (...) ут дауылда,
Көн тыуырын көтөп ятмаған.

34. ...Шоңҡар булып осҡан Сәләм дә,
(...)ем дә йәнен йыр иткән. 35. "Горькийҙың геройы (...) -донъялағы иң ҡәбәхәт кеше!" 36. "Назым (...)те белеү өсөн төрөк телен тыңларға ҡарар иттем".

**ВЕРТИКАЛЬ БУЙЫНСА:**

1. Яҙмам тигән инем атайҙан,
Яуға китте атам Алтайҙан.
Алырымҡош алды атамды,
Алалманы ләкин (...)ды.

2. "Ҡарға маҡтанып (...) булмаҫ, ишәк маҡтанып толпар булмаҫ (мәҡәл)". 3. (...) Зөбәйерова - Рәми Ғарипов менән оҙаҡ йылдар хат алышҡан татар шағирәһе. 4. "Ер аҫты ҡыҙына" шиғыры ошо транспортҡа арналған. 7. "Граф Нулин - французлыҡҡа төрөнгән урыҫ. Уның тураһында яҙып, (...) йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултырта".

8. "Ә баҙлауыҡ балҡып йондоҙ булмаҫ,
Ысын йондоҙ ул тик - Мәрйәмең.
Уртаҡлағыҙ бергә ғүмер юлын",
Был донъяның татып һәр йәмен.
Был юлдар кемгә арналған?

9. "(...) - Шекспир һәм Мильтондан ҡала өсөнсө бәһлеүән".

13. Эс бошорғос талғын сәғәт теле,
Нисә ҡабат инде ураны!..
Уйҙарымдың моңһоу ебен һүтеп,
Үкһей тышта (...) бураны. 14. "(...)тең һәр күренешендә үҙенә генә хас матурлыҡ бар. Шуларҙың бөтәһен дә тоя белергә Тургенев кеүек һүрәтләй алырға кәрәк". 18. "Аманат" ҡобайырында кешегә шағир дүрт терәк күрһәткән: ил, ирек, күрк. Дүртенсеһе нимә?

19. Тик намыҫты данға алмаштырмам,
Юҡ, алданмам арзан даныма.
Мин янырмын ғәҙеллекте яклап,
Ҡәләмемде манып (...)ыма.

22. "Ҡарлуғас" шиғыры кемгә арналған?

23. Яҙ - йырсы ул, яҙ - (...) ул,
Төрлө моң, өн, буяу ул.
Яҙ йоҡламай, ижад итә,
Һин дә, шағир, уяу бул!

24. Ә бит (...) был көйөнсә
Тереләй һуйған һымаҡ,
Тамсылап йыйған абруйҙы,
Түңкәреп ҡуйған һымаҡ.

28. "Уртаса шағир булыуҙан уртаса прозаик булыу яҡшыраҡ. Уны, исмаһам, уҡыйҙар. Ул яҡшы прозаик тыуҙырырға булышлыҡ итә. Ә уртаса шағир (...)ны үлтерешә". 29. Уның "Күгәүен" тигән романын шағир бик яратып уҡыған.

30. "Белмәйем, нилектән мин (...)тар күрһәм шул тиклем аҡылдан яҙам. Кеше аҡылы тыуҙырған иң бөйөк мөғжизә".

32. Мин йырлайым һине үҙ телемдә,
Тел аҫҡысын бирҙе әсәйем.
Йәш бөркөттәй ғорур осор өсөн
Ҡанатымды кирҙең (...)ем.

*КЕМ АЛЫҠ?*

# Ғашиҡтар, һеҙҙең өсөн!

Тиҙҙән һөйгәндәр өсөн иң көтөп алған матур байрам - Ғашиҡтар көнө етә. Был көндә һәр кем яратҡан йәренә матур бүләк әҙерләй, иң татлы һүҙҙәрен, изге теләктәрен еткерә.

Был кисте тағы ла күңеллерәк, онотолмаҫлыҡ итеп үткәргегеҙ киләме? Улайһа, **14 февралдә Башҡорт дәүләт филармонияһында** үтәсәк Ғашиҡтар көнөнә арналған "Йондоҙ менән йондоҙ серләшә" исемле дуэттар концерты тап һеҙҙең өсөн. Серле лә, сихри ла, тетрәндергес тә тамашала башҡорт эстрадаһының иң сағыу йондоҙҙары сығыш яһаясаҡ. Бының өсөн бары тик беҙ тәҡдим иткән викторина һорауҙарына дөрөҫ яуап бирергә кәрәк һәм ике кешелек саҡырыу ҡағыҙы һеҙҙең ҡулда.

Артистарҙың тормош юлдаштарын дөрөҫ билдәлә:

1. Артур Туҡтағолов - Лилиә Биктимерова
2. Урал Мортазин - Венера Юлгилдина
3. Фәдис Ғәниев - Лилиә Фәтихова
4. Тимур Юлгилдин - Лилиә Ишемйәрова
5. Хәлит Фәтихов - Миңзифа Иҫҡужина

**Саҡырыу ҡағыҙын ҡулға төшөрөргә ашыҡ. Бының өсөн редакцияға шылтыратып, яуабыңды ғына әйтергә кәрәк.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хөрмәтле Ғәлләмов Хәмзә хажи Искәндәр улы, Һеҙҙе Башҡортостан республикаһы мосолмандарының Төбәк Диниә назараты рәйесе - мөфтөй вазифаһына тәғәйенләнеүегеҙ менән ысын күңелдән ҡотлайым! Илгә, дингә хәйерле хеҙмәттәрегеҙҙе теләп,

**Нурмөхәммәт хәҙрәт НУРИЕВ.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Күләүектә - күләүек, шулай уҡ йондоҙ ҙа күреп була

Хаталарҙан ҡасырға тырышыу икенсеһенә юлыҡтыра.

Бер ниндәй ҙә етешһеҙлеге булмаған кеше юҡ, яҡшы кешелә улар аҙыраҡ - шул ғына.
**(Гораций).**

Берәү күләүектә бары тик күләүекте, икенселәр йондоҙҙарҙы күрә.
**(Лев Толстой).**

Пессимист - ул ҙур тормош тәжрибәһе булған оптимист.
**(Станислав Ежи Лец, поляк яҙыусыһы).**

Кешенең холҡон ул етәксе булғас ҡына ныҡлап белеп була.
**(Э. Ремарк).**

Ғәжәпләнер өсөн бер мәл етә, ә ғәжәп нәмәләрҙе ижад итеү өсөн йылдарға һуҙылған түҙемлек һәм ныҡышмалы хеҙмәт талап ителә.
**(Боронғо аҡыл).**

Емеш биргән ағасҡа ғына таш ташлайҙар.
**(Боронғо аҡыл).**

Башҡалар етешһеҙлеген күреүҙән дә ҙурыраҡ етешһеҙлек юҡ.
**(Джебран Хәлил).**

Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ хаҡлы түгел икән, уның янына бар ҙа ғәфү үтен.
**(Француз мәҡәле).**

Башҡаларҙың насар ҡылығына һылтаныу - ул бысраҡ менән йыуыныуға бәрәбәр.
**(Ж. Пети-Сан).**

Һәр хәҡиҡәттең яҙмышы шулдыр: тәүҙә көләләр, шунан таныйҙар.
**(А. Швейцер).**

Яҡшы "ҡоралланған" кеше генә яҡшы йоҡлай торғандыр.
**(Блез Паскаль).**

Ир кеше ике осраҡта - ас булғанда һәм кәмһетелгәндә, ә ҡатын-ҡыҙ мөхәббәттә бәхетһеҙ булғанда асыулы.
**(М. Ломоносов).**

Аҡыллыға кәңәш кәрәкмәй, ә ахмаҡ уның менән барыбер файҙаланмай.
**(П. Таранов).**

Йә, Хоҙай, эшләй белгәнде башҡарып сығыу өсөн көс бир, эшләй алмағанға күнеү өсөн түҙемлек бир, уларҙың береһен икенсеһенән айырыу өсөн аҡыл бир.
**(Боронғо Көнсығыш аҡылы).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Өс кеше нимәлер төҙөй, ти. Өсөһө лә бер үк эште башҡара, ләкин уларҙан: "Нәмә эшләйһегеҙ?" -тип һорағас, улар төрлөсә яуап бирә. Берәүһе: "Мин таш ватам", - ти, икенсеһе: "Мин аҡса эшләйем", өсөнсөһө: "Мин ҡорам төҙөйөм", - тип яуап бирә".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **53-25-44, 72-89-09, 73-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.
Тиражы - 6029
Заказ 620